✓ *Аптырама аҫыл заттың алға сыға алмауына,*
*Илтифат ит һис юғында аҫта ятып ҡалмауына.*

*Рәшит ШӘКҮР.*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2 - 8 АПРЕЛЬ (АЛАҒАРАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№14 (432)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Ҡуян йылында...**



ҡуяндар ның үрсер һымаҡ

5

**Пушкин карсығылай булма -**

нәфсенде ауыҙлыкла һәм шөкөр ит



6-7

**Үпмәйһең дә тиеп үпкәләмә,**



8-9 үпһәм, ауыҙым яман өйрәнә...

**Сәкән һуғырға өйрәтеү...**



12 сәмде, рухты күтәрер сара булды

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҢӘГЕҘ...

## Халыкты эскенән арындырып булыуына ышанаһығыҙмы?

***Гөлсәниә ЯМАЛОВА, уҡытыусы:*** Маҡсат ҡуйһаҡ, арындырырбыҙ. Тик беҙ маҡсат ҡуйыуға тиклем өлгөрөп етмәгәнбеҙ бит әле. Башыбыҙға индерергә, мейегә һеңдерергә, йөрәкте тетрәтергә кәрәк был идея менән. Әле беҙ һүҙ менән генә зарланабыҙ ҙа, шунан ары китә алмайбыҙ. Әйтерһең, эскелек бер ҙә еңелмәй торған дейеү бәрейе! Дейеүҙәрҙе лә еңгән бит Урал кеүек батырҙарыбыҙ. Бөгөн беҙгә республика етәкселәре, зыялыларыбыҙҙың "Әйҙәгеҙ, эскелеккә ҡаршы көрәшкә күтәреләйек!" тигән ораны кәрәк. "Беҙ үҙебеҙ эсмәйбеҙ, эскелекте күрә алмайбыҙ, һеҙ ҙә эсмәгеҙ!" тигән һүҙе кәрәк. Ә халыҡ һәр ваҡыт үҙ лидерҙарына, юлбашсыларына ҡараған, улар артынан эйәргән. Шуға ла маҡсат иң юғары кимәлдә ҡуйылһа, был афәтте еңеү бер ни ҙә тормаясаҡ. "Айыҡ ауыл" конкурсы халыҡты айыҡтырыуға тәүге аҙым булыр, тип уйлайым. Республика Хөкүмәте кимәлендә был проект-ты хуплаған документ та ҡабул ителһә, эш һөҙөмтәле һәм уңышлы килеп сығасағына шик юҡ.

***Рәхим СӘЛИМОВ, журналист:*** Ысынлап та, бөтөнләй енеп булмаҫтай нәмә түгел тип уйлайым мин дә эскелекте. Барыһы ла кешенең үҙенән тора. Мәҫәлән, күптән түгел ике байрам - Ватанды һаҡлаусылар һәм Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө булып үтте. Коллективта беҙ ул байрамдарҙы эскеһеҙ үткәрҙек. Хәҙер Өфөлә ундай коллективтар артҡандан арта. Хатта коллективтарҙа айыҡ саралар үткәреү, шул сиктәрҙә спорт уйындарында ҡатнашыу, тәбиғәт ҡосағына сығыу модаға әйләнеп бара. Ауылдарҙа ла иҫерек табындарҙан, "колхозса" байрам итеү ҡалыптарынан арына баралар һымаҡ. Шулай булһын. Айыҡлыҡ - тормош талабы. Шуны аң менән ҡабул итергә өйрәнеү фарыз. Коллективтарҙа кешене эшкә ҡабул иткәндә етәксе мотлаҡ "Эсәһеңме?" тигән һорауҙы иң тәүҙә бирергә тейеш, тип уйлайым. Эш урыны өсөн ҡалтыранып торған кеше элек башҡаларға эйәреп аҙ-маҙ эскәләгәндә лә, айыҡ коллективҡа килһә, тора-бара айыҡ йәшәү рәүешенә күсеп китәсәк.

Бындай миҫалдар бихисап хәҙер.

***Әләм ЮЛБАРЫҪОВ, Өфө ҡалаһы, 71 йәш:*** Кешене айыҡтырам тип, уларҙың араҡы һатып алыу мөмкинлеген юҡҡа сығарһаҡ, уларҙың буш ҡалған күңеленә әлегә билдәле булмаған башҡа афәттәр килеп ояламаҫмы, тигән шик тыуа. Әлбиттә, эскелекте кәметеүгә көс һалырға кәрәк. Һәм был эште араҡыға ҡаршы көрәш лозунгыһы күтәреп кенә түгел, ә иманға ҡайтыуҙы, сәләмәт йәшәү рәүеше алып барыуҙы милли идея юғарылығына күтәреп башҡарырға кәрәк. Шул саҡта халҡыбыҙ бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ эскенән арынасаҡ.

***Булат АБДУЛЛИН, БДУ студенты, 20 йәш:*** Медицинала шундай нәмә билдәле: пациенттың ниндәйҙер ағзаһы ауырый икән, уның барлыҡҡа килеү сәбәбе шул ағзаның үҙендә генә булмауы бар. Ауырыуҙың сәбәбе төптәрәк ята: йә йөрәктә, йә умыртҡа һөйәгендә, йә тағы ла тәрәндәрәк - йәшәү рәүешенең дөрөҫ булмауында... Эскелек проблемаһын да шартлы рәүештә ауырыу менән сағыштырһаҡ, унан һауығыу юлын араҡы йә һыраға, йә уларҙы һатҡан кибеттәрҙе юҡ итеүҙә генә күрергә ярамай. Мәсьәләгә комплекслы ҡарағанда ғына алама ғәҙәт булараҡ тамыр йәйгән эскелек берешәсәк, берҙәм көс ағымына ҡаршы тора алмай, сигенәсәк. Ғөмүмән, халҡыбыҙҙың эскелеккә тарыуында иң төп сәбәптәрҙең береһе - реклама. Уға айыҡлыҡты пропагандалаусы рекламаны ҡаршы ҡуйырға кәрәк.

***Шайморат ҒИНИӘТУЛЛИН, Ишембай районы, 52 йәш:*** Үҙебеҙҙең районға күҙ һалғанда, ауылдарҙа бер-бер артлы мәсеттәр ҡалҡып сығыуынан, кешеләрҙең йәйләп иманға ҡайтыуынан айыҡлыҡҡа юл башын асыҡ күрәм. Уйланған кеше иманға ҡайта. Бына шулай һәр кем үҙ асылы, киләсәге, балалары, ейәндәре хаҡында уйланһа, бәлки, бер-нисә йылдан эскеселәр ҙә кәмер. Уйға һалайыҡ халыҡты, зыялылар, аҡыл эйәләре һүҙе менән.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

КЕМ АЛЫҠ!

## МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2011 йылдың икенсе ярты йыллығына гәзитебеҙгә яҙылыу дауам итә. Март айында яҙылғандарҙың квитанциялары килеп етте һәм ... беҙҙең бағыусыбыҙ тәкдим иткән микротулҡынлы мейес Ғафури районы Бәләкәй Үтәш ауылынан Миңлеүәрә Сәйғәфәрова өлөшөнә әләкте. Ҡотлайбыҙ!**

Вәғәҙә итеүебеҙсә, апрелдә лә гәзитебеҙгә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын редакцияға ебәреүселәргә "Бүләгебеҙҙе кем алыҡ!" тип әйтмәксебеҙ. Сираттағы бағыусыбыҙ был юлы **кеҫә телефоны** тәкдим итә.

**Әйткәндәй,** кемде был бүләк ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы **тыуған көнө** менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**"Киске Өфө" бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, ата-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Шулай итеп,** 2011 йылдың икенсе ярты йыллығына яҙылыу өсөн яңы хаҡтарҙы хәбәр итәбеҙ: 50665 индексылыһына **340 һум 92 тинга**, 50673 индексылыһына (юридик шәхестәр өсөн) **370 һум 92 тинга** яҙыла алаһығыҙ.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**



ЙҮКӘ ТЕЛЕФОН




### Өфө

Һуңғы ваҡытта "Киске Өфө" гәзите редакцияһына: "Таһир Ишкинин ҡайҙа булды? Нинә уның мәҡәләләре гәзиттә күренмәй башланы? Уны ҡыйыулығы өсөн "аттылармы", әллә "аҫтылармы?" - тип шылтыратыусылар уғата күбәйеп китте. Уның мулланан да, хужанан да ҡурҡмай, ҡыйыу, шул уҡ ваҡытта үҙенсәлекле сурытыу стилендә яҙаған сығыштары үтә популяр булып киткәйне шул. Автор был яҙмалары өсөн Хөкүмәтебеҙҙең Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премияһына ла лайыҡ булды. Таһир тураһында һорашып шылтыратыусылар күп булырын күҙ уңында тотоп, "Йүкә телефон" агентлығы аша булһа ла, түбәндәгеләрҙе хәбәр итәбеҙ:

-Таһир Ишкинин имен-һау ( элеккесә шаян һәм сымыры, һаҡалын ҡырмаған) Өфө ҡала округы хакимиәтендә эшләп йөрөй;

-Әлеге ваҡытта ул "Стена" исемле тарихи-философик роман өҫтөндә тәүлек әйләнәһенә эшләй. Үҙе сер итеп кенә әйтеүенсә, әҫәре Ҡытай стенаһы хаҡында икән. 2,5 мең саҡрымға һуҙылған был тарихи ҡомартҡыны ҡытайҙарға башҡорттар төҙөп биргән, имеш. Был стена бер үк ваҡытта Урал тауҙарын да хәтерләтә. Кем белә, бәлки, романы дилогияға йә трилогияға әйләнеп китһә, "Киске Өфө" гәзите уҡыусылары уның "Аҙна шаңдауы" рубрикаһындағы мәҡәләләрен тиҙ арала ғына уҡый ҙа алмаясаҡ. Уның ҡарауы, роман эксклюзив рәүештә беҙҙең гәзиттә баҫылырына шик юҡ. Һәр хәлдә, романын донъяға иң тәүҙә беҙҙең баҫма аша күрһәтер тип ышанабыҙ, быға өмөт итәбеҙ;

-Таһирҙың үҙе белдереүенсә, ул әлеге ваҡытта, роман яҙыуҙан ял иткән арала, беҙҙең гәзиткә яңы проекттар өҫтөндә эшләй. Бәлки, ул проекттары "тып" итеп килеп тә сығыр;

-Әйткәндәй, Таһир яңыраҡ ҡайны булып китте, улы Заһир данлыҡлы Таштуғай һыуын үҫеп эскән Хәйбулла һылыуы менән никахлашып, башлы-күҙле булды.

### Әбйәлил

Районның "Йүкә телефон" агентлығы хәбәр итеүенсә, һуңғы ваҡыт ныҡ шаулаған Өскүл ауылы мажаралары Италия психологы, философы, рәссамы, онтопсихология мәктәбенә нигеҙ һалыусы Антонио Менегетти исеме менән бәйле икән. Магнитогорск эшҡыуары Ян Токарев уның өсөн ошо ауылдың эргәһендәге күл янында йорт һала икән.

Әйткәндәй, 1998 йылда Италияның Эске эштәр министрлығы онтопсихологтар ассоциацияһын саентология менән бер рәттән ҡурҡыныс секталар исемлегенә индергән. Шулай итеп, үҙ иленән "тибелгән" психолог 2004 йылда Санкт-Петербург дәүләт университетының психология факультеты базаһында кафедра асыуға өлгәшә. Был хәлгә лә аптырарға түгел: совет осоронан алып илебеҙҙең күп кенә ғалимдары үҙебеҙҙең илдә яҡлау тапмай, ситкә тибелеп, Европала, Америкала, Японияла "кеше булды". Кемдер беҙгә лә килеп кеше булырға тейеш тә баһа. Был осраҡта башҡорттар "Ҡунаҡ ашы - ҡара-ҡаршы" ти. Бәлки, шуның өсөн дә, беҙҙең халыҡта шундай мәҡәл булғанға күрәләр ҙә, психолог фәҡәт беҙгә, Башҡортостандың иң матур урынына килеп морон төртәләр. Һәр хәлдә, һуңғы ваҡыт колхоз-совхоздар емерелеп, ирҙәре эшһеҙ ҡалып, күп кенә ҡатындар Италияға барып йәшәрлек аҡса эшләгәнен дә оноторға ярамай беҙгә. Беҙ бит иң ҡунаҡсыл һәм толерант милләт.

Мәсьәләнең икенсе яғы: онтопсихологияға нигеҙ һалыусы Антонио Менегетти кешене көнкүреш шарттарында, тарихи аспект фонында өйрәнеүҙе беренсе планға ҡуя. Кем белә, бәлки, ул ошо яҡ башҡорттарын ныҡ өйрәнеп, уларҙың үҙ ерҙәрен ситтәргә һатыуын туктата алыр. Ул сағында Антониоға республикабыҙҙың иң юғары наградаһын юлларға була. Уны башҡортса һөйләшергә лә өйрәтербеҙ, айыуҙы ла бейергә өйрәтәләр.

Мәсьәләнең өсөнсө яғы: кешелек Уралдан башланған тигән фараз дөрөҫкә сыға бит, йәмәғәт. 2012 йылда нимә көтөлгәнен дә беләбеҙ. Европаның ҙур өлөшө, шул иҫәптән Италия һыу аҫтында ҡалыуы ла көтөлә. Был осраҡта аҡыллы кеше тауҙарға ҡаса инде. Борон да, йәғни башҡорт милләте йөҙҙән ашыу ырыуҙарҙан (халыҡтарҙан) бер ҡорға - баш ҡорға ( "башҡорт" атамаһы шунан) ойошоуҙан барлыҡҡа килгән. Милләтебеҙ яңынан ойошамы инде, улайһа? Тик ситтән килеүселәр беҙҙең телде һәм милләтте ҡабул итергә теләһә...

### Баймаҡ

Халыҡ берҙәм булһа, хаҡлыҡ өҫкә сығыр, тигән боронғолар. Күршеләре әбйәлилдәрҙең яйлап-яйлап үҙ ерҙәренән яҙа барыуын күреп йәшәгән, бынан ғибрәт алған баймаҡтар Магнитогорск ҡалаһының "Ситно" агрохолдингына үҙ ерҙәрен биреүҙән ҡырҡа баш тартҡан тип ишеттек районның "Йүкә телефон" агентлығы хәбәрселәренән. Агрохолдинг районның иң уңдырышлы тупраҡлы, донъя кимәлендә дан тотҡан ҡаты бойҙай үҫтерә торған ялан ерҙәрен 49 йылға ҡуртымға алыу һылтауы менән ҡулға төшөрмәксе булған икән. "Һылтауы" менән, сөнки 49 йылға тигәне мәңгегә тигән һүҙ инде ул. Ә бит 49 йылда ике быуын алмашынып өлгөрә һәм унан һуң кем бар ҙа, кем юҡ. Икенсенән, был зонала 5 йылдың өс йылы ҡоро килә, тимәк, магниттар Баймаҡ ерҙәренә иген сәсер өсөн генә килергә йыйынмай, тигән уйҙар ҙа бар. Әлбиттә, бында ҡаланың йәшәү биләмәһен киңәйтеү маҡсаты ла барҙыр. Әйткәндәй, шул уҡ Магниторгорск ҡалаһы ла, ғөмүмән, Силәбе өлкәһе тотошлайы менән тарихи Башҡортостан ерендә урынлашҡан. Тимәк, башҡорт ерҙәренә һөжүм, заманына ҡарап, төрлө формала һәм һылтауҙар менән дауам итә тип уйларға ла урын ҡала бында.

Һәр хәлдә, афарин, баймаҡтар! Әлбиттә, ауыл хужалығына инвестициялар йәлеп итмәйенсә лә булмайҙыр. Әммә күрәләтә халыҡты ерһеҙ,эшһеҙ, сабынлыҡһыҙ, көтөүлекһеҙ ҡалдырыу иҫәбенә индерелергә тейеш түгел бындай инвестициялар. Баймаҡтар, күрәһең, ошо хәҡиҡәтте аңлап өлгөргәндәр. Күршеләре әбйәлилдәрҙән айырмалы рәүештә. Әйткәндәй, Әбйәлил районы хакимиәте башлығы булып әлеге ваҡытта Баймаҡ егете эшләй. Ерҙәрҙе һаҡлау буйынса тәжрибә уртаҡлашыр өсөн ебәргәндәрҙер инде улар үҙ кешеһен. Күрше хаҡы - тәңре хаҡы бит...

**Әмир ҒҮМӘРОВ**
**бәйләнешкә сыҡты.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ИХЛАСЛЫҠҠА ТӘРЖЕМӘ КӘРӘКМӘЙ,

## йәки Театрҙа шишмә тауышы…

**Театрҙа шишмә сылтырағандай булды. Күптән ишеткәнем юҡ ине был тауышты. Сәбәпсеһе - яҙыусы Салауат Әбүҙәрҙең "Хыялый" лирик комедияһы.**

Бар донъя, кешелек прагматик идеяларҙы, көнитмеш мәсьәләләрен, матди байлыҡты, аҡсаны көнүҙәк мәсьәлә итеп ҡуйып йәшәгән бер мәлдә ауылдың ябай ир-уҙаманы Ғиззәт (Илдар Сәйетов) хыял донъяһы менән йәшәй. Уны хатта ғүмер буйы бергә йәшәгән ҡатыны Шәрифә лә (Гүзәл Маликова) аңлай алмай. Шәрифә ире алып ҡайтҡан сәсҡәләрҙе лә һыҙлаған быуындарын дауалар өсөн төнәтмәгә сеймал итеп кенә күрә. Бер мәл Ғиззәт ауылдарына килеп, үҙҙәренә фатирға төшкән шәфҡәт туташы Йондоҙға (Алһыу Ғәлина) ғашиҡ була. Ғиззәттәге үҙгәрештәрҙе күршеһе Закир (Әхәт Хөсәйенов) менән силсәүит Сәлим (Азамат Ғафаров) һиҙеп ҡала. Хыялдың, фантазияның сиге юҡ. Ғиззәт тә күңелендәге талпыныуҙы еңә алмай, самолет эшләй башлай һәм осоп та китә. Уның был осошона бер кем дә ҡамасаулай алмай. Ғиззәт бының менән башҡаларҙы ла үҙгәрергә мәжбүр итә.

Сәхнә әҫәренең йөкмәткеһе ҡыҫҡаса ошолай. Ә төпкәрәк төшөп ҡараһаң, Ғиззәт йөҙөндә беҙ прагматик дәүерҙә рухи үҫеш юлын һайлаған милләтебеҙ образын да күрәбеҙ. Башҡалар ҡарашында был образ бигерәк сәйер ҙә, бер ҡатлы ла, хыялый ҙа күренгән һымаҡ. Әммә ул халҡыбыҙҙың иң илаһи сифатынан - ихласлығынан үҫеп сыға. Залдағы тамашасыларға ла иғтибар итеп ҡуйҙым. Ул көндө спектаклгә килеүселәрҙең яртыһынан күберәге беҙҙең телде аңламаусы милләт вәкилдәре ине. Уларҙың да байтағы синхрон тәржемәне тынлар өсөн наушниктар алмайынса спектакль ҡараны. Ихласлыҡҡа тәржемә кәрәкмәй шул. Дөрөҫөрәге, шишмә сылтырауы бөтә телдәргә лә тәржемәһеҙ аңлашыла.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓19-20 майҙа Башҡортостанда "Рәсәй ғаиләһе" VIII халыҡ-ара конгресы үтәсәк. Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең ошо туралағы ҡарарына Рөстәм Хәмитов ҡул ҡуйҙы. Бойороҡта конгресстың темаһы "Ғаилә һәм демография:милләт-ара татыулыҡты үҫтереүҙең социаль потенциалы" тип билдәләнгән.

✓Баймаҡ районы муниципаль район Советы ҡарарына ярашлы, Баймаҡ районы хакимиәте башлығы вазифаһына контракт буйынса Илшат Хәмит улы Ситдиҡов тәғәйенләнде.

✓БР Дәүләт Йыйылышы- Ҡоролтайҙың Мәғариф, фән, мәҙәниәт, спорт һәм йәштәр эштәре буйынса комитеты инициативаһына ярашлы 2011 йылдың 8 апрелендә Учалы ҡалаһында БР-ҙың физик культура һәм спорт өлкәһе ҡануниәтенең үҫеш перспективаларына арналған кәсмә ултырышы буласаҡ. Ҡыҙыҡһынған бөтә кешеләр һәм ойошмалар ошо тикшереләсәк өлкәләге ҡануниәтте камиллаштырыу буйынса тәҡдимдәрен kobraz@gsrb.ru сайтына ебәрә ала.

✓Социаль һәм ғаилә мөнәсәбәттәре өлкәһендәге республика ҡануниәтен камиллаштырыу буйынса тәҡдимдәр әҙерләү маҡсатында БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачевтың бойороғо менән депутаттарҙың эш төркөмө булдырылды. Уға Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай рәйесе урынбасары Лилиә Ғүмәрова етәкселек итә. Әле парламентта Көнбайыш илдәренең, Рәсәй төбәктәренең хоҡуҡ белгестәре практикаһын өйрәнеү нигеҙендә эшләнгән хоҡуҡ документтары өҫтөндә эш алып барыла. Ғаиләләгә йәбер-золомдо иҫкәртеүгә йүнәлдерелгән закон проекты ла шуларҙың береһе булып тора. Уны ҡабул итеү зарурлығын депутаттар ғәмәлдәге ҡануниәттә туған-тыумасаға ҡарата ҡылынған енәйәттәр өсөн яуаплылыҡты күҙ уңында тотҡан махсус статьяларҙың булмауы менән аңлата.

✓Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте бойороғона ярашлы, 9 апрелдән 21 майға тиклем Башҡортостанда тораҡ пункттар территорияһын таҙартыу, төҙөкләндереү һәм йәшелләндереү буйынса экологик өмәләр үтәсәк. Былтыр ошондай айлыҡ осоронда 90 мең тонанан ашыу ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтары полигондарға һәм сүплектәргә сығарылған.1,5 млн-дан ашыу ағас һәм ҡыуаҡ ултыртылған. 1,8 млн куб метр самаһы юл, 260 мең погон метрҙан ашыу ҡойма, бина фасадтары йүнәтелгән.

## ПРЕЗИДЕНТ БЛОГЫНАН




**"Мәскәү урамдарында урам аша һуҙылған яҙыуҙар һәм реклама щиттары аҙ. Ә бит бер ваҡыт ҡаланы йәрминкәгә әйләндергәйнеләр: күҙ сыбарлана, биналар күренмәй ине. Ә беҙҙә нисек? Өфөлә, Стәрлетамаҡта, башҡа ҡалаларҙа? Ауылдарҙа? Дөрөҫөн әйткәндә, миңә урамдарыбыҙҙың рекламалы тышҡы "кейеме" бигүк оҡшамай. Сыбарлыҡ, теңкә ҡоротҡослоҡ - зауыҡһыҙлыҡ ул. Бигерәк тә төрлө конторалар, фирмалар, магазиндарҙың ҙур итеп яҙылған атамалары оҡшамай. "Нотариус" йәки "Эттәр өсөн аҙыҡ", "Резина шлангылар" тип ҙур хәрефтәр менән яҙып ҡуйылған. Европала подъезд ишеге алдында нотариустың, адвокаттың, стоматологтың эшләүен бедергән баҡыр табличка ғына эленә. Эттәр өсөн аҙыҡты ла былай рекламаламайҙар. Унда барыһы ла баҫалҡы, әммә лайыҡлы һәм матур. Беҙҙең магазиндарҙың яҙыуҙары ҡомартҡы түгел.  Мәҫәлән, Өфө буйлап китеп бараһың, реклама щиттарының йымылдауын, магазиндарҙың сәйер атамаһын күрәһең. Ҡырағай, ят атамалар күп. Былар барыһы ла  биналарҙың, ҡоролмаларҙың, ҡала диуарҙарының, магазиндарға, контораларға, фирмаларға ингәндәге тышҡы биҙәлешендә тәртип булдырыуҙы талап итә. Ҡаланың мәҙәниәте, тәү сиратта, тышҡы биҙәлештән башлана", - тип блоггерҙарға фекер алышыуға яңы тема бирҙе Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов. Ысынбарлыҡта, социологтар белдереүенсә, кеше үҙе уҡығандың  - 20, күргәндең 40 процентын иҫендә ҡалдыра. Әгәр урам буйҙарында ғына түгел, телевизор экрандары аша ла бер үк нәмәне көнө-төнө уҡый, күрә икән, ул инстинктына эйәреп, кәрәкһә лә, кәрәкмәһә лә, сифатлы булһа ла, булмаһа ла шул нәмәне барып аласаҡ. Ә был хаҡта блоггерҙар нимә уйлай?**

# РЕКЛАМА БЕҘГӘ ЯРҘАМ ИТӘМЕ,

## әллә кесәбеҙгә һуғыу менән генә сикләнәме?

**defo7.** Ошо өлкәлә 11 йыл эшләүем ҡайһы бер иҫкәртеүҙәр һәм тәҡдимдәр яһарға мөмкинлек бирә:

1. БР ҡалаларында реклама урынлаштырыу өсөн яңы ҡағиҙәләр эшләргә кәрәк. Ни өсөнмө? Сөнки ғәмәлдәгеләре иҫкереү генә түгел, үткәндәрҙә бал менән идара иткән ҡайһы бер төркөмдәрҙең ихтыяжына көйләнгән.

2. "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында" БР законын реклама йөрөтөүселәргә ҡарата ҡулланыу тураһында законлы комментарий кәрәк.

3. Реклама материалдарын башҡорт теленә тәржемә итеүҙең компетентлы рәсми органын билдәләү зарур.

4. Ҡалаларҙа биналарҙың һәм ҡоролмаларҙың, шул иҫәптән сауҙа биналарының тышын биҙәүҙең дөйөм концепцияһын эшләй башларға кәрәк. Был бик мөһим!

5. Өфө буйынса: Мәскәүҙәге кеүек "Реклама власын" аныҡларға кәрәк. Әле хәлторош ике яҡлы. Реклама биреүсе бихисап ведомстволар араһында йүгерә. "Берҙәм тәҙрә" булыуы мотлаҡ.

**strvenera.** Беҙҙә, Стәрлетамаҡта, бер бинаға әллә күпме реклама элеүҙәре мөмкин, бина үҙе хатта күренмәй ҙә. Уларҙың береһе икенсеһенән "тауышлыраҡ", өҫтәүенә, бина алдындағы ҡыҙыл туҡымалар коммунистик плакаттарҙы хәтерләтә. Шулай уҡ атамаларҙы ла аңламаҫһың. Хужаларҙың фантазияһы етмәгәнлеге күренеп тора. Реклама щиттарының сифаты һәм һаны буйынса контроль кәрәк. Быны башларға иртә түгел, сөнки зауыҡ балалар баҡсаһынан башлана, ә матурлыҡ барыһына ла кәрәк, күңел күтәреү өсөн булһа ла. Хакимиәт витриналарҙы һәм алтаҡталарҙы иң яҡшы биҙәүгә конкурс иғлан итә ала.

**vip_qwerty.** Реклама биреүселәр биналарҙың милекселәренә түләһен ине. Ә беҙҙә торлаҡ йорттарға рекламалар эләләр ҙә, реклама агентлығы файҙа ала, ә милекселәргә бер нәмә лә юҡ. Торлаҡ йорттарҙың лифттарына ла ҡағыла был. Идара итеүсе компаниялар реклама биреүселәрҙән бының өсөн аҡса алып, шул иҫәптән фатир өсөн түләүҙәрҙе кәметергә тейеш.

**timzmei.** Реклама - тауар әйләнешенең двигателе. Ә яҡшы тауар быныдай рекламаға мохтаж түгел. Насар, ваҡыты сыҡҡан, иҫкергән тауар рекламаға мохтажлыҡ кисерә лә инде. Былай уны хатта ҡарарға ла килмәйәсәктәр бит.

**mprepod.** Реклама аңлайышлы, ҡыҫҡа һәм аныҡ булырға тейеш. Алтаҡталарҙы бик йыш, бигерәк тә башҡорт теленә тәржемә иткәндә, хаталы яҙалар. Бынан тыш, реклама водителдәрҙең иғтибарын йәлеп итә, бигерәк тә ҙур экрандар булғанда. Яҡшы брендтарҙы рекламалау кәрәкмәй, улар былай ҙа яҡшы үтә. Шулай уҡ реклама Яңы йыл шыршыһы кеүек сыбар булырға тейеш түгел.

**rasideal.** Автобус туҡталыштарындағы борт рәүешендәге рекламаларға иғтибар йүнәлтке килә. Улар граждандарға йәмәғәт транспортына ултырырға ҡамасаулай. Ҡышын уларҙы урап үтәм тип травма алырға мөмкин. Бигерәк тә оло йәштәгеләргә ауыр. Был инде тышҡы күренеш кенә түгел, хәүефһеҙлек мәсьәләһе.

**ccccccccc12c.** Һуңғы ваҡытта көслө ел осраҡтары күбәйҙе. Йәйгеһен үк шуға иғтибар иткәйнем, көслө ел ваҡытында ҙур щиттың бер мөйөшө йорт стенаһына һуға ине. Ҡурҡыныс. Бәлки, тап ошо реклама щиты артында йорт емерелә башлағандыр. Был "Простоквашино" мультигындағы кеүек була инде. Иҫләйһегеҙме? "Ә был картинанан ни файҙа?" "Ә унан файҙа ҙур, ул стеналағы тишекте ҡаплай". Шуға ла мин тәү сиратта йорттарҙағы реклама щиттарын алыр инем.

**dein_laune.** Мин рекламаға тыныс ҡарайым. Әммә ҡала уртаһында  диванда эске кейемдә һәм ойоҡта ғына ҡатын-ҡыҙ арты менән ята икән, ойоҡто ла түгел, ҡатын-ҡыҙ тәнен дә түгел, ә тап диванды рекламалауҙарын аңлауы ауыр. Бында инде сыҙамлыҡ шартлап һына. Бәләкәй балалар бармаҡ төртөп күрһәтә, үҫмерҙәр хихылдашып үтеп китә. Кемдер быларҙың барыһын да контролләргә һәм тикшерергә тейеш бит!

**partemiy.** Әгәр Өфө ниндәйҙер кимәлдә профессиональ реклама менән сыбарланһа, бәләкәй ҡалаларҙа ғәҙәти  павильондарҙың фасадына йәки һыра ларектарына реклама щиттары элеп ҡуйыуҙары асыуҙы ҡабарта. "Реклама тураһында" Федераль законға ярашлы, мәғариф йәки балалар мәҙәниәт учреждениеларына 100 метр арауыҡта һыра һәм уның нигеҙендә эшләгән изделиелар рекламалау тыйыла. Барлыҡ ҡалаларҙың архитекторҙарына һәм Роспотребнадзорҙың урындағы бүлексәләренә Законды үтәй башларға ҡушырға кәрәк.

**airaton.** Тышҡы реклама буйынса идеялар: 1. Барлыҡ реклама конструкцияларын дизайн буйынса унификацияларға һәм уларҙы 5-7 йыл дауамында алмаштырырға, сығымдарҙы һалымдар иҫәбенә компенсацияларға. Бер стандарт конструкция проекты, ҡуйыуы менән бергә иҫәпләгәндә, яҡынса 200-300 мең һум тора. Әлбиттә, ҙур аҡса, ҡайһы берҙә улар йылдар буйына ла хаҡын сығармай.

2. Заманса технологияларҙы алға ебәрергә - мультипанелдәрҙе, видеоэкрандарҙы, өс ҡырлы һүрәтләнеште, псевдодинамик һ.б. шул иҫәптән конструкцияларҙы кәметеү иҫәбенә.

3. Биналарҙы проектлау, төҙөү һәм реконструкциялау барышында уҡ реклама урынлаштырыу мөмкинлеген ҡарарға.

**aleks_sv.** Стәрлетамаҡта "ҡыҙыл линия"ла һәр щитта тиерлек һыра рекламаһы! Бер ваҡытта ла беҙҙең ҡалала быныдай күренеш булғаны юҡ ине әле. Ҡала түгел, ә ҙур һырахана тиерһең.

**Nasibullov.** "Социаль реклама" тигән конкурс үткәрелде, хатта был турала телевизорҙан да һөйләнеләр, күрһәттеләр. Рекламасылар  бергә йыйылышып, аҡыллы йөҙ менән беҙгә, ябай халыҡҡа, социаль реклама етешмәгәнлеген асыҡланылар. Конкурстан һуң бер-береһен маҡтанылар, хупланылар, хушлаштылар һәм төрлө яҡҡа таралыштылар. Маҡталған реклама ҡайҙа? Йыйылыусылар һәм бихисап наградалар менән бергә киттеме? Ә беҙҙә барыһы ла һаман элеккесә...

**gildamag.** Әгәр реклама грамоталы, матур һәм күҙгә ҡыуаныс өҫтәрлек итеп эшләнгән икән - ул кәрәк, әгәр унда эстетика юҡ, ул уңайһыҙлыҡтар тыуҙыра икән - ул кварталдың йәки ҡаланың имиджына кире йоғонто яһай. Мәҫәлән, сит илдә үҙ тауарын һатырға теләүсе тауар сығарыусы әҙер тауарға 10-30 процент реклама өсөн сығымдарҙы ла индерә. Әгәр реклама менән профи шөғөлләнһә, ул теләһә ҡайһы архитектурала ла матур күренәсәк.

**yakshimbetov.** Щиттарҙағы рекламалар урынына ниндәйҙер билдәле эшмәкәр тураһында яҙырға тәҡдим итәм. Мәҫәлән, башҡорт шағиры Рәми Ғарипов тураһында. Күптәр уның тураһында бер нәмә лә белмәй бит. Уның ижады, тормошо тураһында яҙып, туҡталышта ҡуйырға була. Халыҡ, транспорт көткән арала, танышыр ине.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Блоггерҙарҙың ҡайһы берҙәре серҙе асып биреүенсә, ниндәй генә етештереүсе булмаһын, уның продукцияһының һатыу хаҡына реклама хаҡы ла һалынған була. Тимәк, реклама өсөн эшҡыуар, бизнесмен түгел, һеҙҙең менән беҙ түләйбеҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусы. Хәҙер инде үҙегеҙ һығымта яһағыҙ, реклама прогресс үҫешен тәьмин итәме, тауар әйләнешен үҫтерәме, әллә беҙҙең кесәгә генә һуғамы?**

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

## Н И М Ә ?   Ҡ А Й Ҙ А ?   Ҡ А С А Н ?

✓Венгрияның баш ҡалаһы Будапешт кикбоксинг буйынса асыҡ Европа чемпионаты булып үтте. Рәсәй йыйылма командаһы составында Башҡортостандан ете тапҡыр донъя чемпионы Вил Ғабдуллин да ҡатнашты. Ул бында ике алтын, бер көмөш миҙал яуланы. Хәҙер Вил Ғабдуллин июндә Испанияның Майорка утрауында үтәсәк донъя чемпионатына әҙерләнәсәк.

✓Башҡортостан Мәскәүҙә"Интурмаркет - 2011" халыҡ-ара туризм күргәҙмәһендә ҡатнашты.Сарала Рәсәй төбәктәренән 1220 ойошма ҡатнашҡан. Бөтә донъяла туризм өлкәһенән алынған табыш мәғлүмәт технологияларынан һуң икенсе урында килә. Былтыр Башҡортостанда 1,9 млрд һумлыҡ путевка һатылған.Шуның 400 млн һумы ғына республика һәм Рәсәй буйынса турҙарға тура килә. Ә 5-7 апрелдә "Туризм. Спорт. Ял. Рәсәй шифаханалары" махсус күргәҙмәһе Өфөлә үтә.

✓Башҡортостан артистары АҠШ-та Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының штаб-квартираһында беренсе тапҡыр үткәрелгән Науруз байрамында сығыш яһаны. "Төрксой" Халыҡ-ара төрки мәҙәниәттәре ойошмаһы ойошторған концертта Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле солистары һәм Башҡорт дәүләт филармонияһы артистары ҡатнашты. Был программаны Азат Биксуриндың ҡурай моңдары асып ебәрҙе.

✓Өфө аэропорты йәйге ваҡыт буйынса эшләй башланы.45 йүнәлештәге маршруттарға тағы тиҫтәләп яңы йүнәлеш өҫтәләсәк. Мәҫәлән, "Ырымбур авиалиниялары" Испания, Италия, Ҡытай илдәренә чартер рейстары ойоштораласаҡ. "Урал авиалиниялары" самолеттары менән Болгария, Кипр, Италияға юлланып буласаҡ."Ю-Тэйр" Прага һәм Мюнхен йүнәлештәрен үҙләштермәксе.

✓Башҡортостан Республикаһының Фән һәм техника өлкәһендәге дәүләт премиялары буйынса БР Президенты ҡарамағындағы комиссия 1 апрелдән 31 майға тиклем БР Фән һәм техника өлкәһендәге дәүләт премияларын алыуға эштәр ҡабул итә.Эштәр түбәндәге адрес буйынса тапшырыла: Өфө ҡалаһы, Туҡай урамы,46, БР Президенты хакимиәте, 315-се йәки 328-се бүлмә. Белешмәләр өсөн телефондар: 250-09-60, 250-11-71.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# СОЦИАЛЬ ПЕНСИЯ АРТА

**Ошо йылдың 1 апреленән социаль пенсия күләме 10,27 процентҡа арттырыла. Пенсионерҙың категорияһына ҡарап, беҙҙең республикала был төр пенсия күләмен арттырыу суммаһы 405 һумдан 953 һумға тиклем тәшкил итәсәк.**

Элек социаль пенсиялар ике этапта индексацияланды. Быйыл был схемаға төҙәтмә индерелде һәм 2011 йылдан алып социаль пенсиялар пенсионерҙың үткән йыл өсөн йәшәү минимумы үҫеше темптарын иҫәпкә алып, йылына бер индексациялана. Был саҡырылыу буйынса хәрби хеҙмәт үткән хәрби хеҙмәткәрҙәр, уларҙың ғаилә ағзалары, шулай уҡ радиация һәм техноген һәләкәттә зыян күргән граждандарға ҡағыла.

Ике пенсия алыусыларҙың күрһәтелгән коэффициентҡа тиклем бер пенсияһы - дәүләт пенсияһы арттырыла. Был төр пенсионерҙарға һуғыш травмалары әҙәмтәһендә инвалид булыусылар, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан кешеләр, "Блокадалағы Ленинградта йәшәүсе" билдәһенә эйә булған инвалидтар, шулай уҡ һәләк булған хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең тол ҡатындары һәм саҡырылыу буйынса хәрби хеҙмәт үткән мәрхүмдәрҙең ата-әсәләре инә. Рәсәй Пенсия фондының БР буйынса бүлексәһе идарасыһы Фоат Хантимеров әйтеүенсә, 1 апрелдән республикала 104 мең пенсионер пенсияны яңы күләмдә ҡулына аласаҡ. 1 апрелдән шулай уҡ федераль льготниктарға айлыҡ аҡса түләүҙәре күләме 6,5 процентҡа артасаҡ. Ундайҙар республикала бөтәһе 385 мең кеше.

# "УРАМҒА СЫҒЫП БЫҪҠЫТ!"

**Мәскәү ҡалаһы властарының торлаҡ йорттарҙағы баҫҡыс майҙансыҡтарын тәмәке төтөнөнән ҡотолдороу буйынса башланғысын Рәсәйҙең баш санитар табибы ла элеп алды.**

"Беҙҙәге күп подъездар хас та аэродинамик торба кеүек,- тине журналистарға Геннадий Онищенко.- Өҫкө ҡаттағы фатирҙарға төтөн "өрҙөрөлә". Баҫҡыс майҙансыҡтарында тартыуҙы тыйыу - бик ваҡытлы һәм урынлы сара!" Ә инде Роспотребнадзор башлығынан, меҫкен тәмәкеселәр ни эшләр һуң, тип һорағас, ул ҡәтғи генә итеп: "Ташларға кәрәк. Ә инде һаман да тартаһың икән, урамға сығып быҫҡыт", - тип ҡырт киҫте. Ошо көндәрҙә "Мәскәү ҡалаһын тәмәке төтөнөнән һаҡлау тураһында" закон проекты Мәскәү дәүләт думаһы ҡарауына сығарылды. "Закон тәү сиратта дауаханаларға, мәғариф учреждениеларына, арендаға алынған офистар һәм ҡала властары органдарына ҡағыла,- тине проект авторҙарының береһе, Хальҡара ҡулланыусылар йәмғиәттәре конфедерацияһының идара рәйесе Дмитрий Янин.- Закондың үтәлеше буйынса яуаплылыҡ учреждение етәкселәренә йөкмәтелә. Үкенескә күрә, торлаҡ йорттарҙа тәмәке тартыуҙы ҡала властары тыя алмай - шәхси милекселек!" Шуға ҡарамаҫтан, әгәр бындай закон федераль кимәлдә лә ҡабул ителә ҡалһа, фатирҙарҙағы һауаны һаҡлау һис һүҙһеҙ тыйыласаҡ. Тик шуныһы әлегә аңлашылмай: тәмәке тартыуҙы кем контролдә тотасаҡ һуң? Бәлки, төтөн детекторҙары ҡуйырҙар?

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# "ӘССӘЛӘМУҒӘЛӘЙКҮМ!"-

## йәғни тыныслыҡ һәм именлек теләйем

**Халҡыбыҙҙың донъя кимәлендә ҙур танылыу яулаған тарихи шәхестәре, сәйәсмәндәре, арҙаҡлы улдары бихисап. Улар араһында күренекле совет дипломаты, дәүләт эшмәкәре Кәрим Хәкимов айырым бер урын алып тора. Рәсәйҙең илселек тарихында уның сәйәси эшмәкәрлеге баһалап бөткөһөҙ. Төпкөл ауылдан, ябай ғаиләнән сыҡҡан егет үҙ тырышлығы менән белем алып, СССР-ҙың Сәғүд Ғәрәбстанындағы Генераль консулы дәрәжәһенә ирешкән, был ил менән СССР араһында йылы мөнәсәбәттәр урынлаштыра алған. Илсене ғәрәптәр ололап Ҡыҙыл паша тип йөрөткән.**

Үткән аҙнала баш ҡалабыҙҙа Кәрим Хәкимовтың тыуыуына 120 йыл тулыуға арналған "Рәсәй һәм ислам донъяһы: үҙ-ара цивилизациялы бәйләнеш тарихы һәм перспективаһы" тип аталған халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференция булып үтте. Әзербайжан, Үзбәкстан, Болгария, Бельгия, Голландия, Сәғүд Ғәрәбстаны, Франция, АҠШ-тан дипломаттар, ғалимдар, мәҙәниәт эшмәкәрҙәре, журналистар ҡатнашҡан сараның пленар ултырышында РФ Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Григорий Рапота, Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов та килде һәм сығыш яһаны. Рөстәм Зәки улы Кәрим Хәкимовтың ике ил араһына һалған дуҫлыҡ күперенең әһәмиәте тураһында һөйләп, бер аҙна элек Сәғүд Ғәрәбстанына сәфәре, унан бай тәьҫораттар менән ҡайтыуы тураһында ла телгә алып үтте. "Бындай халыҡ-ара конференцияны йыл да үткәреү зарур, - тине Президент.- Исламдың тыныслыҡ һөйөүсе дин булыуын халыҡҡа еткереү, уның үҙ сиратында кешеләр араһында яҡшы мөнәсәбәттәргә килтереүен аңлатыу - төп бурысыбыҙ..."

Халыҡ-ара конференцияла ҡатнашыусы сит ил ҡунаҡтары ла сараны бик юғары баһаланы. "Белеүебеҙсә, Х быуатта уҡ ғәрәп сәйәхәтсеһе, илсе Ибн Фаҙлан башҡорт иленә килә һәм бында ислам динен тарата, - тине Сәғүд Ғәрәбстанының телевидение журналисы Хөсәйен Мөбәрәк ошо конференциянан алған тәьҫораттары менән уртаҡлашып. - Миненсә, ана шул ваҡыттан алып беҙҙең илдәр, халыҡтар араһында яҡшы мөнәсәбәттәр урынлаша башлаған. Тик кемдер быны боҙорға һәм исламды террор менән бәйләп, ҡурҡыныс итеп күрһәтергә теләй. Ләкин беҙ хаҡикәттә былай түгел икәнен беләбеҙ. Беҙ күрешкәндә бер-беребеҙҙе "Әс-сәләмү-ғәләйкүм" - "Һеҙгә тыныслыҡ һәм именлек булһын" тип сәләмләйбеҙ. Ошонан уҡ дinебеҙҙең именлек, тыныслыҡ, дуҫлыҡ яҡлы икәнен күрәбеҙ. Белеүемсә, Башҡортостанда һуңғы йылдарҙа ислам дине тарала, яҡын арала ҙур мәсет тә һалыныуы көҙ уның тотола. Был илдә күп төрлө милләт вәкилдәре тупланған, улар төрлө диндә булыуға ҡарамаҫтан, үҙ-ара татыу, берҙәм йәшәй. Бындай күренеш башҡа бер ерҙә лә юҡ. Башҡортостанда беҙҙе, ғәрәптәрҙе лә, ихлас ҡабул итәләр, тип уйлайым. Киләсәктә үҙ-ара бәйләнештәрҙе сәйәси, иҡтисади һәм рухи йәһәттән үҫешлы алып барырға яҙһын".

**Әйткәндәй...**

**Конференцияла дипломат Кәрим Хәкимовтың 1917-1920 йылдарҙа Башҡортостандағы сәйәси эшмәкәрлеге тураһында иҫкә төшөрөп сығыш яһаусылар ҙа булды. Тарих фәндәре докторы, профессор Марат Ҡолшәрипов, мәҫәлән, былай тине: "Был ҡаршылыҡлы осорҙо ла уның биографияһынан һыҙып ташлап булмай. Ул йылдарҙа Кәрим Хәкимов башҡорт милли хәрәкәтендә ҡатнашыусыларға, хатта Башҡортостан дәүләтселегенә ҡаршы сығыш яһаусы инанған большевик, ленинсы була. Хатта 1918 йылдың февралендә Әхмәтзәки Вәлиди етәкселегендәге Башҡорт хөкүмәтен ҡулға алыуҙа ҡатнаша..." Әлбиттә, был анығ документтарға нигеҙләнгән тарихи факт, ләкин бөгөн берәү ҙә уны ҡабартып, Кәрим Хәкимовтың шәхесенә тап төшөрөргә йыйынмай. Ул замандың ҡатмарлылығын, хатта улдарҙың атайҙарына мылтыҡ төбәгән осор икәнен яҡшы беләбеҙ. Ә инде Кәрим Хәкимовтың дипломат булыуын һәм был йәһәттән илебеҙ өсөн ҙур эштәр башҡарыуын һис инҡар итеп булмай. Һәм был шәхескә арналған халыҡ-ара конференция ғәрәп илдәре менән бәйләнеш урынлаштырыу өсөн төп нигеҙ булып торасаҡ.**

Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.

ХОККЕЙ

# САЛАУАТТАР ЕҢӘСӘК!

**Көнбайыш конференцияла "Салауат Юлаев" менән "Металлург" араһында финал матчтары айырыуса көсөргәнешле бара.**

"Салауат Юлаев" үҙ майҙанында "Металлург" командаһын ике тапҡыр отто, ә бына Магнитогорск ҡалаһында тәүге осрашыуҙа өҫтәмә ваҡытта еңелде, ә икенсе мәртәбә көс һынашыуҙа 2:4 иҫәбе менән еңеп сыҡты. Шулай итеп, финал серияһында юлаевсылар 3 тапҡыр отоп һәм 1 мәртәбә еңелеп, иҫәп серияла 3:1 булды.

Өфө һәм Магнитогорск ҡалалары командаларының икенсе тапҡыр көс һынашыуы айырыуса көсөргәнешле һәм иҫтә ҡалырлыҡ булды. Бында иҫәп тугыҙынсы минутта асылды. Кирилл Кольцов Патрик Торесен ярҙамында "Металлург" ҡапҡаһына гол сәпәне. Бер нисә минуттан Олег Сапрыкин иҫәпте икегә еткерҙе. Икенсе осорҙа юлаевсылар уйын дилбегәһен элеккесә үҙҙәренең ҡулында тотто. Һөжүм итеүсе Сергей Зиновьев һуҡҡан шайбаны "Металлург" ҡапҡасыһы Георгий Гелашвили тота алмай ҡалды. Дүртенсе, еңеүле шайбаның авторы Андрей Кутейкин булды. Магнитогорск хоккейсылары нисек кенә тырышһа ла Эрик Эрсберг ҡапҡаһын "асырға" әмәл тапманы. Осрашыу "Салауат Юлаев" файҙаһына 4:0 иҫәбе менән тамамланды.

30 мартта осрашыу шулай уҡ юлаевсыларҙың 2:4 иҫәбенә еңеүе менән бөттө. Беренсе осор башында уҡ Патрик Торесен команда лидеры Александр Радулов ярҙамында иҫәпте асты. Дөрөҫ, тиҙҙән "Металлург" иҫәпте тигеҙләне. Осор аҙағында иһә Мирослав Блатяк юлаевсыларҙы алға сығарҙы. Икенсе осорҙа тәүҙә Магнитогорск хоккейсылары иҫәпте тигеҙләне, ә осор уртаһында Вячеслав Козлов үҙенең мәргәнлеген күрһәтте һәм иҫәп 2:3 булды. Өсөнсө осорҙоң һуңғы минуттарында ҡапҡасы Георгий Гелашвили һөжүм итеүсе хоккейсыға алмаштырылды, ләкин был "Металлург"ҡа иҫәпте тигеҙләргә мөмкинлек бирмәне. Уның ҡарауы Александр Свитов буш ҡапҡаға 4-се шайбаны сәпәне һәм уйын юлаевсылар файҙаһына 2:4 иҫәбе менән тамамланды.

Финал серияһында еңеү өсөн "Салауат Юлаев"ҡа бер аҙым ҡалды һәм юлаевсыларҙың еңеп сығасағын алдан уҡ күҙалларға мөмкин, тиергә була. Еңеү шатлығын кисереүгә күп ҡалманы.

Юныс ӘХМӘҘИЕВ.

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Апрелдә Өфөлә Ислам комплексы төҙөлә башлаясаҡ. Комплексҡа Ислам фәндәре академияһы, конференциялар залы булған Өфө үҙәк йәмиғ мәсете, башланғыс мосолман мәктәбе, балалар баҡсаһы, ҡунаҡ йорто, мәрхәмәтлек йорто һәм башҡа ҡоролмалар инәсәк. Ислам үҙәге төҙөлөшө өсөн Өфөлә 21 га ер участкаһы бүленгән.

✓Өфөнөң Нефтселәр мәҙәниәт һарайында Мәғариф форумы сиктәрендә "Мәғариф. Фән. Карьера - 2011" махсус күргәҙмәһе асылды. Форум йәштәр фәне көндәрен, вакансиялар йәрминкәһен, "Йәштәргә - эш" акцияһын һәм "Йәҙ юл - береһе һинеке" фотоконкурсын үҙ эсенә ала.

✓Рәсәйҙең 81 мегаполисы араһында Башҡортостандың баш ҡалаһы бер юлы дүрт номинацияла иң яҡшыһы булды. Өфөбеҙҙе күптән түгел Мәскәүҙә үткән баш ҡалалар һәм "БДБ-ның һәм Европа иҡтисади берләшмәһенең иң яҡшы ҡалаһы"конкурстарында шулай билдәләнеләр. Өфө опека һәм попечителлек системаһы, мәғарифҡа яңылыҡтар индереү буйынса, шулай уҡ торбаларҙағы һыуҙы таҙартыусы ин камил технологияларға эйә булыуы, энергияны һәм тәбиғи байлыҡтарҙы һаҡлау өлкәһендәге күрһәткестәре менән башҡа ҡалаларҙан айырыла.

✓Өфө ҡала округы хакимиәтендә хакимиәт башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов журналистар менән осрашты һәм баш ҡалала йәштәр сәйәсәтен тормошҡа ашырыу мәсьәләләре тураһында һөйләне.

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә төҙөлөш комплексының былтырғы йыл эш һөҙөмтәләре тураһындағы мәғлүмәт тыңланды. Билдәләнеүенсә, былтыр баш ҡалала 654 мең квадрат метр торлаҡ (2009 йыл кимәленә 116 процент) файҙаланыуға тапшырылған, уларҙың 295,9 мене - күп ҡатлы, 358,5 мене шәхси йорттар.

✓22-30 апрелдә Өфөлә бокс буйынса Рәсәй чемпионаты үтәсәк.

✓1-2 апрелдә Өфөлә "Сәләмәт йөрәк" Бөтә Рәсәй акцияһы үтә. 2 апрелдә иртәнге 9-ҙан 15 сәғәткә тиклем һәр кемдең Нефтселәр мәҙәниәт һарайына барып, үҙенең һаулыҡ торошон тикшертеү, врач-кардиолог консультацияһы алыу мөмкинлеге бар.

ЙӘНСЕЛ ЙӘНЕН БЕЛЕР

**Үтеп киткән йыл иҫ китмәле ҡоролоҡтары менән ауыл хужалығының бәкәленә ныҡлап һуғып, ер кешеләрен төп башына ултыртты ла ҡуйҙы. Күп өмөттәр бағлап сәскән игендәр тамырында ҡороно, үләндәр көйҙө, урман янғындары тураһында әйтеп тороға ла түгел. Башланып киткән ҡуян йылының нисек килере билдәһеҙ, әммә үҙенең үрсемлелеге менән айырылып торған, тимәк, уңыш вәғәҙә иткән ҡуянға әҙәм балаһы ҙур өмөттәр бағлай. Ҡуян йылында ҡуяндар үрсетеү отошло булыр, тип был шөғөлгә ныҡлап тотоноусылар ҙа юҡ түгел. Шуларҙың береһе - Ишембай районының Бәләкәй Байыҡ ауылында йәшәүсе Айгөл һәм Марс ҒӘЛИЕВТАР ғаиләһе.**

# ҠУЯН ЙЫЛЫНДА...

## ҡуяндар ныҡ үрсер һымаҡ



Гөлназ Ишембаева фотоһы.

Ысынлап та, ҡуяндар үрсемле булыуы, тиҙ үҫеүе һәм өлгөрөүе менән башҡа хайуандарҙан айырылып тора. Бер инә йорт ҡуянынан йылына 20-30 бала алырға, тимәк, 70-75 килограмм ит етештерергә мөмкин. Етмәһә, ҡуян ите еңел үҙләштерелеүсе аҡһымға эйә булған диетик аҙыҡ булып иҫәпләнә. Унда башҡа иттәргә ҡарағанда холестерин 2,5 тапҡырға аҙыраҡ. Шуға ла ҡуян ите балалар, өлкән йәштәгеләр, бауыр, ашҡаҙан, йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары менән яфаланыусыларға тәҡдим ителә.

Заманында Башҡортостанда йорт ҡуяндары үрсетеүгә ҙур иғтибар бүленде. Хатта башлыса ҡуянсылыҡ менән генә шөғөлләнеүсе ауыл хужалығы предприятиелары ла бар ине. Һуңғы осорҙа ла был шөғөлгә иғтибар арта башланы һәм йорт ҡуяндары үрсетеүгә башлыса крәҫтиән-фермер хужалыҡтары тотондо.

Айгөл менән Марс Ғәлиевтар ғаиләһе ауылдарында иң булдыҡлы һәм уңғандар иҫәбендә. Егәрле булмаһаң, ихата тултырып мал-тыуар аҫрап, күпләп ҡош-ҡорт тотоп, картуф, йәшелсә-емеш үҫтереп йәшәп булыр инеме ни? Бөгөнгө көндә уларҙың һыйырҙары ғына 4 баш. Әйткәндәй, Ғәлиевтар һыйыр малына ныҡлы иғтибар бүлеп, башлыса шул йүнәлештә эшләргә иҫәп тота. Ошо маҡсатта Марс Малик улы крәҫтиән-фермер хужалығы асып ебәргән. Буш торған иркен генә бина, һыйыр һауыу аппараты һәм башҡа кәрәк-яраҡ һатып алған. Ләкин яҡын-тирәлә мал аҙығы базаһының һәм аҡсаһының наҡыҫыраҡ булыуы фермерҙы был ниәтенән баш тартып торорға мәжбүр иткән. Шулай ҙа үҙ шөғөлөн булдырыуға ынтылышын юҡҡа сығармаған. Артабан барыһын да ҡырҡ үлсәүгә һалып, ваҡ булһа ла хаҡ булһын, тип, Айгөлө менән эште бәләкәйерәгенән башларға, йәғни ҡуянсылыҡҡа тотонорға ҡарар иткәндәр.

Ырымбур яҡтарында йәшәүсе фермерҙан 10 баш аҡ һәм һоро великан тоҡомло йорт ҡуяны, улар өсөн ситлектәр һатып алалар. Эштәре көйлө генә китеп, ярайһы уҡ үрсем алып ташлайҙар.

- Тиҙ арала ҡуяндарыбыҙҙың файҙаһын да күрә башланыҡ. Ҡылый күҙҙәрҙе байтаҡ ҡына һаттыҡ та, бүләк тә иттек, һайлап нәҫелгә лә ҡалдырҙыҡ, - ти Айгөл Ғәйсәр ҡыҙы.

Күптән түгел генә Ғәлиевтар шул уҡ фермерҙан фландр тоҡомло 6 баш йорт ҡуяны һатып алып ҡайтҡан. Был тоҡомло ҡуяндарҙың ауырлығы тере килеш 10 килограмм самаһы тарта һәм уларҙы аҫрауы отошлораҡ.

- Район хакимиәте етәкселегенә рәхмәтлебеҙ. Үтенесебеҙҙе кире ҡаҡмай, кесе һәм урта эшҡыуарлыҡты үҫтереү фондынан 300 мең һум аҡса алырға ярҙам итте. Был суммаға яңы ситлектәр һатып алдыҡ, - тине Марс Малик улы.

Бөгөн фермерҙың ҡуян фермаһында көмөш төҫөндәге, ҡара-һоро һәм калифорния тоҡомло йорт ҡуяндары ла бар. Әммә фландр тоҡомлоһон күпләп үрсетергә иҫәп тота эшҡыуар.

Әлбиттә, ҡуян, уларға ситлек һатып алыу менән генә эш алға тәгәрләп китмәй. Уның өсөн махсус белем, тәжрибә һәм, иң мөһиме, ныҡышмалылыҡ кәрәк. Һуңғыһы Ғәлиевтарҙа баштан ашҡан һәм бына ошо сифаттары яңы үрҙәр яулауға этәрә лә инде. Унған ғаилә яҡын көндәрҙә һарыҡсылыҡҡа тотонорға иҫәп тота. Уларҙы аҫырау өсөн ҡуралары әҙер, ҡайҙан тоҡомло һарыҡтар алырға белешеп тә ҡуйғандар. Был ниәттәренең тормошҡа ашырына ла шик юҡ.

Мал тотҡан һәр кем кеүек, Ғәлиевтарҙы ла мал аҙығы мәсьәләләре борсой.

- Һатып алам тиһәң - ҡиммәт. Йорт ҡуяндары өсөн махсус аҙыҡтың 1 тоғо 1200 һум тора. Быйыл бесәндең хаҡы ла оһо-һо бит инде. Шуға ла бар көстө мал аҙығын әҙерләүгә һаласаҡбыҙ, - ти Ғәлиевтар.

Уларҙың инде күптән ҡул араһына ингән ярҙамсылары ла бар - ҡыҙҙары Алина һәм улдары Айнур. Икеһе лә, ата-әсәләренә оҡшап, бик тырыш.

Айгөл Ғәйсәр ҡыҙы Бәләкәй Байыҡта клуб мөдире вазифаһын да башҡара һәм ауылдаштарына рухи байлыҡ өләшергә ынтылып тора. Ауыл халҡы, мәҙәни сараларҙы көтөп алып, унда бик әүҙем ҡатнаша. Мәҫәлән, "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" байрамы ҙур тантанаға әүерелеп, һәр кемдең күңелендә онотолмаҫлыҡ хәтирәләр ҡалдырған. Оҙаҡламай "Ҡарға бутҡаһы" байрамын үткәрәсәктәрен һәм уға әҙерлек алып барыуҙарын да әйтеп алды Айгөл. Ауыл балаларын төрлө мәҙәни сараларға, конкурстарға әҙерләүҙе лә үҙ өҫтөнә алған ул. Ауыл клубы яғылмауы сәбәпле, репетицияларҙы үҙ өйөндә үткәрергә мәжбүр бөгөн Айгөл Ғәйсәр ҡыҙы. Клуб һыуыҡ булһа ла, ауылдаштарының күңеле йылы, нурлы булһын, тип тырыша ул. Ғөмүмән, ҙур булмаған Бәләкәй Байыҡ ауылы кешеләре тотошлайы менән матур йәшәргә ынтылған халыҡ, үҙҙәре матур бер ғөләмә. Ә Ғәлиевтар ғаиләһе шул ғөләмәнең үҙенсәлекле сағыу бер сәскәһе.

**Мөҙәрис БАҒАЕВ.**
**Ишембай ҡалаһы.**

---

ҺОРАУ - ЯУАП

### ШТРАФ ТҮЛӘТМӘҪТӘР

**Тиҙҙән миңә 45 йәш тула, ләкин был ваҡытта мин икенсе ҡалала командировкала буласаҡмын. Паспортты алмаштырыу өсөн алдан уҡ документтар биреп китә аламмы? Юғиһә, ҡайтыуыма штраф түләтеүҙәре ихтимал.**

- Юҡ, документтарҙы көнәлгәре тапшыра алмайһығыҙ. Быны паспорт алмаштырыуға нигеҙ булған хәл килеп тыуғандан һуң 30 көн дауамында эшләргә кәрәк. Әгәр ҙә инде эш буйынса, һаулыҡ торошо сәбәпле йәки шәхсән һеҙгә бәйле булмаған башҡа сәбәптәр (спорт ярыштары, армияла хеҙмәт итеү һ.б.) арҡаһында паспортығыҙҙы алмаштырыу өсөн тейешле документтарҙы тапшырырға йәшәгән урынығыҙ буйынса миграция хеҙмәте подразделениеһына килә алмаған хәлдә, ошо ғәфү итерлек хәлдәрҙе иҫбатлаусы белешмә йә башҡа документтарығыҙ булһа, һеҙҙән бер кем дә штраф түләтмәҫ.

### БЕЛЕШМӘ КИЛТЕРЕГЕҘ

**Яңыраҡ иҫкеһе урынына яңы паспорт алдым, ләкин унда теркәлеү хаҡында билдә булмай сыҡты. Миңә ни эшләргә?**

- Был осраҡта паспортығыҙҙы Берҙәм хисаплау касса үҙәгенә (ЕРКЦ) теркәлеү тураһында билдә ҡуйҙыртыу өсөн алып барып тапшырығыҙ. Йә булмаһа, унан теркәү хәле тураһында белешмә алып, уны йәшәгән урынығыҙ буйынса миграция хеҙмәте подразделениеһына биргеҙ һәм һеҙгә теркәлеү хаҡында мисәтте шунда уҡ һуғып бирерҙәр. Иң яйлыһы, йәшәгән урынығыҙҙа теркәлеү тураһында белешмәне (ЕРКЦ-нан) паспортты алмаштырыу өсөн әҙерләнгән документтар менән бергә тапшырыу.

### ОҘАҠҠА ҺУҘЫЛҺА ЛА

**Стәрлетамаҡта теркәлгәнмен, ләкин Өфөлә эшләйем һәм йәшәйем. Паспортты алмаштырыу өсөн эшемде ташлап Стәрлетамаҡҡа ҡайтып йөрөй алмайым, миңә ни эшләргә?**

- Һеҙ БР буйынса Рәсәй федераль миграция хеҙмәте идаралығының Өфөләге телнән ниндәй подразделениеһына мөрәжәғәт итә алаһығыҙ, тик был осраҡта яңы паспортты әҙерләү ваҡыты 2 айға һуҙыласаҡ.

### ВАҠЫТЫ ҮТЕП БАРА

**2008 йылда, балаһына операция яһайҙар тип, әхирәтем минән 100 мең һум бурысҡа аҡса алып торғайны. Ул мине алдаған - бер ниндәй ҙә операция яһамағандар, хәҙер ул аҡсаны бирмәй. Быйыл яҙ килешеү төҙөмәйенсә генә адвокатҡа 5 мең биреп яллағайным, ул бер эш тә башҡармаңы, аҡсаны ла ҡайтармай - үҙемә нисек кәрәк, шулай итеп яҙып, отчет бирәсәкмен, ти. Аҡсаларымды нисек кире ҡайтарырға?**

- Конфликтты көйләү өсөн һеҙгә йә адвокатҡа, йә уның етәкселегенә мөрәжәғәт итергә кәрәк, оҙаҡҡа һуҙмағыҙ, сөнки һеҙҙең аласаҡты юллау өсөн билдәләнгән ваҡытығыҙ үтеп бара. Адвокаттан юллау ғаризаһы тултырып, судҡа ебәреүен һорағыҙ. Тиҙ арала ошоно эшләмәһәгеҙ, 100 мең аҡсағыҙ менән хушлашһағыҙ ҙа була.

---

Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



### Паразиттарға ҡаршы дауа

Эстәге паразиттарҙы бөтөрөү өсөн бер уҡ күләмдә әрем, һарыҒыҙ (беҙҙең яҡта ҡыҙылбаш тиҙәр - золотысячник) үләндәрен ҡатнаштырып, 1 стакан ҡайнаған һыуға 1 ҡалаҡ шул ҡатнашманы һалып, 20 минут ҡайнатырға, һөҙөргә. Иртәнсәк ас ҡарынға 1 стакан эсергә. Дауаланыу ваҡыты - 8 көн.

### Аяҡ осонда тороу ҙа шифалы

Ҡан тамырының варикоз киңәйеүе тромбофлебит ауырыуына килтереүсән. Ул хәлгә етмәҫ өсөн көн дә аяҡ остарына баҫырға ла, ҡапыл ғына үксәләрҙе иҙәнгә төшөрөргә кәрәк. Даими эшләп өйрәнһәң, бер ҡыйынлығы ла юҡ. Был күнегеү тамырҙарҙа ҡан йөрөшөн яҡшырта, ҡанға ойошоп тығылырға ирек бирмәй.

### Картуф шифаһы

Картуф күп ауырыуҙарға шифа булып тора:

❖гастритты дауалау өсөн 2 аҙна буйына яртышар стакан сей картуф һыуын эсергә кәрәк. Гастрит менән бергә колит та юҡҡа сыға;

❖ҡан баҫымын төшөрөү өсөн картуф ҡабығын йыуып, ярты сәғәт ҡайнатып һөҙәһең һәм көнөнә 3 мәртәбә яртышар ятакан эсәһең.

### Геморрой яфалағанда...

❖шешкә көнөнә 3-4 мәртәбә 2 минутҡа һалҡын һыуға манылған еүеш марля ҡуяһың. Бер нисә көндән марляға боҙ киҫәге төрөп, ярты минутҡа ҡуяһың;

❖4 балғалаҡ балан ҡайырыһын 1 стакан һыуҙа бешереп, 30 минут ҡайнатаһың. Ҡайнар көйө һөҙөп, аҙыраҡ һыу өҫтәп, ашар алдынан көнөнә 3 мәртәбә 1-әр ҡалаҡлап эсәһең; 50 грамм шыршы үләне һабағын һәм 100 грамм һоло һаламын 3 литр ҡайнар һыуҙа бешереп, 2 сәғәт тотаһың. Ошо ҡайнатманы 20-25 градуслы һыуға һалып, көнөнә 3 мәртәбә 15-әр минут ултыраһың;

❖1 ҡалаҡ һары мәтрүшкәне 1 стакан һыуҙа бешереп, 15 минут һүрән утта ҡайнатырға һәм көнөнә 4 мәртәбә сирек стаканлап эсергә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*СЕТЕРЕКЛЕ ҺОРАУ*



# БЫЯЛАЛАЙ...

## үтә күренмәле булып булмай

**ҺОРАУ: "Һеҙ ҡатынығыҙҙы йә ирегеҙҙе нисегерәк итеп алдайһығыҙ?"**

**Сәлимйән Әминев, хаҡлы ялда, ғаилә стажы 55 йыл:** Эй-й-й-й, балаҡайҙар, ғаилә тормошонда аҙыраҡ ҡына шаштырып, ҡабартып ебәреүҙе бер ҙә гонаһҡа һанамайым мин. Шунһыҙ булмай ул. Әлбиттә, был ҙур һәм мөһим булмаған мәсьәләләргә генә ҡағыла. Әбейемде шаяртып, аҙыраҡ алдаштырып ебәрәм. Уның инде күпме ғүмер бергә йәшәү дәүерендә лә һаман минә ышаныуы, минең һүҙҙәрҙе ысынға алып аптырап китеүен күҙәтеүе ҡыҙыҡ. Ләкин быны ысын мәғәнәһендәге алдашыуға һанамайым, шаяртыу тип кенә ҡарайым.

**Шәфиға Бикйәнова, тәрбиәсе, ғаилә стажы 35 йыл:** Бер төрлө лә алдауҙы ҡабул итмәйем. Үҙем дә кешене һис ҡасан алдамайым. Гел генә дөрөҫөн һөйләйем, тураһын әйтәм. Әлбиттә, был холҡом минә ҡыйынлыҡтар килтерә, ләкин юлымдан тайпылдыра алмай. Иремде лә һис ҡасан алдағаным юҡ. Алдар өсөн, минеңсә, ниндәйҙер хилафлыҡ, боҙоҡлоҡ, ярамаған эш ҡылырға кәрәк. Бәләкәйме, ҙурмы - уныһы мөһим түгел. Шулай булмаһа, ни өсөн алдашырға һуң? Алдашыу, тәү сиратта, ниндәйҙер ваҡиғанан һуң үҙеңдең күңеленде тынысландырыу өсөн кәрәк, минеңсә. Сөнки алдаҡ хәбәр менән ирендең күҙен томалайһың. Ләкин, һәр алдау ҡасан булһа ла ҡалҡып сыға, бына шул саҡта ауырға тура киләсәк.

**Ләйсән Әбелғужина, полицияның өлкән лейтенанты, ғаилә стажы ярты йыл:** Алдамаҫҡа тырышаһың, ҡайһы саҡ килеп сыҡмай. Алдан уйлап, планлаштырып, ниндәйҙер маҡсат ҡуйып алдашыуҙы күҙ уңында тотмайым. Ә бәләкәй, әҙ әһәмиәтле алдауҙарҙы әйтәм (әгәр ҙә улай тип әйтеп була икән). Мәҫәлән, әхирәтеңдең яңы алған күлдәге бик үк килешеп бөтмәһә лә, уның күңелен төшөрмәҫ өсөн һыңғай яуап бирәһең. Ә иремдә алдауға килгәндә, әлегә ундай осраҡтар булғаны юҡ һәм булмаҫ тип ышанам. Яҙмыштарҙы бергә бәйләргә ҡарар иткән кешенде алдарға нисек тел әйләнһен? Булмайҙыр ул.

**Азамат Сәлихов, студент, ғаилә стажы бер йыл:** Минеңсә, ҡатын-ҡыҙ тормошта күберәк алдай. Ул, бәлки, алдайым тип тә алдамайҙыр, ләкин шулай килеп сыға. Ирҙәрен дә ҡатындар күберәк алдай, минеңсә. Мин бында глобаль масштабтан сығып түгел, ә бәләкәй генә ситуацияларҙан сығып әйтәм. Мәҫәлән, ул теләмәгән ҡунаҡҡа йыйынһаң, уның тиҙ генә йә эсе, йә башы ауырып китә. Көлкөлө ситуация килеп сыға, әлбиттә, ләкин был да бит үҙенә күрә алдау. Әгәр ҙә инде көләшем мине ниндәйҙер мөһим ваҡиғаға бәйле алдай икән, был хәл икебеҙ өсөн дә ауыр тамамланыуы мөмкин.

**Айрат Вәлиев, эшҡыуар, ғаилә стажы 10 йыл:** Ҡатынымды аҙыраҡ алдаштырып ебәрәм инде ул. Һәр ғаилә башлығының ир-егеттәргә генә хас серҙәре, йәшерер ваҡиғалары була. Быларҙың барыһын да ғаиләлә һөйләп тороп булмай ҙа инде. Тормош, ғөмүмән, алдауға ҡоролған. Ҡатыныңды алдайһыңмы, туғаныңдымы, дуҫыңдымы - бында айырма юҡ. Минең был һүҙҙәремде ғаилә тормошонда алдауҙы хуплай тип ҡабул итмәгеҙ. Ләкин, әйткәнемсә, быяла кеүек үтә күренмәле булып булмай.

*ҮҘ ӨЙӨМ- ҮҘ КӨЙӨМ*

**Ауылға ҡайтҡан һайын: "Шаминда өй алғайның, өйөң бик хөртмө ни? Телевизорҙан бик яманлап күрһәттеләр бит. Хәҙер нимә эшләйһең инде?"- кеүегерәк һорау бирмәй ҡалмайҙар. "Әлләсе, минең өйөм шәп ул", - тип шаштырып яуаплайым ҡайһы берҙә. Һәр кем өсөн үҙ балаһы иң матуры, иң аҡыллыһы булған кеүек, минең өсөн дә үҙ өйөм - иң матуры, иң йылыһы, иң ҡотлоһо. Тик ниңәлер халыҡ ысынбарлыҡҡа, һинең әйткәнеңә ышанырға теләмәй, һаман телевизорҙан сыҡҡан һәр һүҙҙе дөрөҫ тип ҡабул итә. "Үҙ йортом" программаһы буйынса төҙөлгән йорттарҙың да етешһеҙ яҡтары барҙыр, бәлки, ниндәйҙер подрядсы үҙ эшенә яуапһыҙ ҡарағандыр, әммә был тотош программа насар тигәнде аңлатмай. Һүҙҙәремде раҫлау өсөн ошо программала ҡатнашыусыларҙың бер нисәһенә һүҙ бирәйек.**

# ПУШКИН ҠАРСЫҒЫЛАЙ БУЛМА -

## нәфсеңде ауыҙлыҡла һәм шөкөр ит

**Гүзәл һәм Мәжит Илембәтовтар:** Өфө ҡалаһы эргәһендә урынлашҡан Шамонин ауылынан өй алыу, уны төҙөп бөтөрөү беҙҙең өсөн тауҙың иң юғары нөктәһенә етеп, бәхет асҡысын ҡулға төшөрөү менән бер булды. Тиҫтә йылдар буйы баш ҡалала йәшәп, дөйөм ятаҡтың бер бүлмәһендә ике бала үстереп, үҙем дә, тормош иптәшем дә бюджет өлкәһендә эшләһәк тә, Өфөлә фатирлы булыу һәр саҡ хыял ғына булып ҡала килде. Һәм бына 2009 йылдың 8 майында беҙҙе автобустарға ултыртып, бығаса бер тапҡыр ҙа ишетмәгән, күрмәгән ергә - Шамонин ауылына алып киттеләр. Ул ауылдың ҡайҙа икәнен бәрәү ҙә белмәй, шуға ла һәр кем тәҙрәгә төбәлгән, үтелгән юлды хәтерендә ҡалдырырға тырыша. Тантана урынында барыһы ла байрамса, музыка уйнай, әҙерлек бара. Беҙҙе бер рәт булып ултырған күргәҙмә өйҙәр менән таныштырҙылар. Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов, Раил Сәлих улы Сарбаев өй төҙөүгә ярҙам итеп бирелгән 300 меңлек дәүләт займына сертификат тапшырҙы. Әйтерһең, сертификат түгел, ә киләсәккә өмөт, ышаныс тотторҙолар. Бөтәбеҙ ҙә ҡыуанабыҙ, тик беребеҙ ҙә был тиклем оло бәхеткә ышанмай. Был ҡағыҙ менән, бына һеҙгә бейек, текә тау, әйҙәгеҙ, ошо тауға үрмәләгеҙ, әгәр тауҙың һөҙәк еренә етһәгеҙ, унда алтын асҡыс булыр, әгәр ошо асҡысты ла ҡулға төшөрһәгеҙ, алтын һарайға инеп, бәхетле ғүмер кисерәсәкһегеҙ, тип өндәшкән кеүек тойолдо минә. Һәм беҙ, бер төркөм йәш ғаилә, "тауға үрмәләй башланыҡ". Тау менән сағыштырыуым бушҡа түгел, төрлө инстанцияларҙан ҡағыҙҙар, ҡултамғалар йыйыу, төрлө документтар туплау, һәр ишек төбөндә сәғәттәр буйы сиратта ултырыу ысын мәғәнәһендә тауға үрләү кеүек булды. Артабан инде подрядсыны, өй урынын һайлап, әҙерәк иркен тын алдыҡ. Ике ай эсендә өйөбөҙҙө төҙөп бөттөләр, ә беҙ Шамонинға ҡайһы саҡ көн дә, ҡайһы саҡ көнөнә ике тапҡыр барып, өйөлөп ятҡан өйөбөҙгә ҡарап, ҡыуанып ҡайтабыҙ. Матур ғына килеп сыға бит өйөбөҙ! Ярай әле ошо ауыр ҙа, ҡатмарлы ла юлда дәртләндереп, кәрәк ерендә ярҙам итеп, беҙҙә төртөп, этеп тороусы туғандарыбыҙ, атай-әсәйҙәребеҙ булды. Өй мәшәҡәттәре менән йөрөгәндә танышҡан йәш ғаиләләр, яңы таныштар ҙа беребеҙгә ярҙамды йыш күрһәттек. Кемебеҙҙер өмөтһеҙлеккә бирелһә, һәр саҡ ярҙам иттек, дәртләндерҙек. Ниһәйәт, 2009 йылдың октябрендә Мортаза Ғөбәйҙулла улы беҙгә үҙ ҡулы менән асҡыс тапшырҙы! Бына ниндәй бәхет! Был асҡыс ысын мәғәнәһендә алтын асҡысҡа бәрәбәр ине.

Асҡыс ҡулда, төҙөлгән йорттоң "ҡумтаһы" күҙ алдында, тағы ла бер-ике ынтылһаҡ... Яңы хыялдар, өмөттәр, ышаныс менән коммуникацияларҙ үткәртеү өсөн тағы ла подрядсылар менән килешеүҙәр төҙөйбөҙ. Газ, ут, һыу үткәртеү, өйҙөң эсендә ремонт яһау, һәр кәрәкте булдырыу, юҡты бар итеү, аҡса табыу, кредит юллау мәшәҡәттәре килеп тыуһа ла, был юлы күңелдә ышаныс бар, үҙебеҙ ҙә ҡыйыулабыҙ. Бына былтыр күптән көткән бәхет һарайына килеп еттек. Былтыр октябрҙә яңы өйөбөҙгә күсендек. Үҙең теләп, тырышып, көтөп, тир түгеп алған бәхет ҡәҙерле була бит. Был өй генә түгел, ауыл да беҙгә бик яҡын. Ҡыҙыбыҙ үҙенең айырым бүлмәһе булыуына ҡыуанһа, бәләкәй улыбыҙ өйҙөң иркенлегенә һөйөнөп бөтә алмай.

Ошо осорҙа күрелгән михнәттәр, бөтә ауырлыҡтар, ҡыйынлыҡтар, сығымдар инде күптән онотолдо. Әммә туғандарҙың, ата-әсәйҙәрҙең ярҙамы, уларҙың изгелеге бер ваҡытта ла онотолмаясаҡ.

Тиҙҙән Шамонин ауылында үҙенсәлекле, күңелле тормош башланасаҡ. Әлегә күп өйҙәр буш тора, әммә яҙ етеү менән уларға ла күсәсәктәр. 1 сентябрҙән мәктәп эшләй башланы, балалар баҡсаһы ла тиҙҙән асыласаҡ.

Яңы йорттарҙа тәүге Яңы йылды ла бик күңелле үткәрҙек. Көндөҙ матур итеп биҙәлгән атта балалы йорттарға Ҡыш бабай үҙе ҡунаҡҡа килде,



✓ ***Шамонинда майҙаны 56 квадрат метр булған өй алдыҡ. Былтыр йәй дауамында өйөбөҙгә түкәтмә эшләнек. Хәҙер йортобоҙ 80 квадрат метр тәшкил итә. Ҡалала бындай фатир тураһында хыялланып та булмаç ине.***



бүләктәр, күстәнәстәр таратты. Ә инде төнгө сәғәт бергә бөтә Шамонин халҡы мәктәп янында урынлашҡан шыршы янына йыйылды. Унда инде ойоштороусылар матур байрам әҙерләгәйне. Сценарий бик төплө уйланылған, уйындар, конкурстар барыһына ла бик оҡшаны. Хәҙер көн дә балалар тауҙан шыуа, ҙурыраҡтар, йәштәр катокта конькиҙа йөрөп кинәнә. Былар, әлбиттә, барыһы ла бушлай. Кис етһә, мәктәптең спорт залында волейбол уйнарға, йога менән шөғөлләнергә мөмкин. Тиҙҙән драма түңәрәге эш башлаясаҡ. Ял көндәре күптәр саңғыла йөрөүҙе ғәҙәт итеп алды.

Шамонин ауылында дәртле, тыныш, матур, өлгө булырлыҡ ғаиләләр бик күп, шуныһы бигерәк тә шатландыра. Тауҙың үренә етеп, бәхет асҡысын ҡулдарына төшөрөп, бәхетле һарайҙа йәшәү бәхетен алыусыларҙың тормошо киләсәктә тағы ла күңеллерәк, тулыраҡ, матурыраҡ, бәхетлерәк буласаҡ!

**Гөлнара Мостафина, ике бала әсәһе:** Шамонинда йәшәй башлауға ла байтаҡ ваҡыт үтте. Уның ҡайҙа, ниндәй ауыл икәнен аңлатып тороу кәрәкмәйҙер тип уйлайым, былай ҙа "даны" бик яҡшы таралған. Шуға ла хәҙер кем менән генә һөйләшһәм дә, һүҙҙе "өйөгөҙ йылымы"нан башлайҙар. Йылы, рәхәт, тиһәң, ышанмай, аптырап ҡарайҙар. Шунан тотоналар телевизорҙан ишеткән хәбәрҙәрҙе һөйләргә. Ҡыҙыҡ. Миңә ышанмайҙар, телевизорға ышаналар. Белгегеҙ килһә, унда 1250-нән ашыу өй! Әлбиттә, араларында илке-һалҡы эшләнгәндәре лә барҙыр, быныһы төҙөүсе ойошмалары намыҫында. Әммә әлегә тиклем унда йәшәүселәр ауыҙынан үкенес һүҙҙәре ишеткәнем юҡ, барыһы ла өйлө булдыҡ тип ҡыуана.

Шуныһы аптыратмай ҡалмай: ни эшләптер, "Үҙ йортом" программаһының етешһеҙлеген барлап, насар тигән данын сығарыуҙы хуп күрҙеләр, ә ыңғай яҡтарына иғтибар ҙа итмәнеләр. Ауылдың яны ғына ҡалҡып сығыуын иҫтән сығарырға кәрәкмәй, минеңсә. Мәскәү ҙә бер көндә генә төҙөлмәгән. Беҙҙең халыҡҡа һәр ваҡыт күп һәм шунда уҡ кәрәк шул. Күп ваҡытта "юҡ" тип илап йөрөйбөҙ ҙә, ниһайәт, булдыниһә, тотонабыҙ зарланырға.



Беҙҙең дә проблемалар булманы түгел, булды. Шамонин менән Өфө араһын ҡайһы бергә көнөнә өс ураныҡ. Киләсәктә оҙаҡ йылдар йәшәй торған өйөбөҙ булғас, нигеҙенән алып уның төҙөлөүендә ҡатнаштыҡ. Матур, һәйбәт, беҙ теләгәнсә булһын тип тырыштыҡ. Һәм теләгебеҙгә өлгәштек. Беҙҙең хәҙер 72 квадрат метр майҙанлы өйөбөҙ, 10 сутый еребеҙ бар. Теләк булғанда, өйҙә өскө яҡҡа ла, арҡыһына ла, буйына ла ҙурайтырға була. Мунса, гараж да төҙөп ултыртырбыҙ, Алла бойорһа. Ә балаларҙың ҡыуанысын күрһәгеҙ! Урамда донъяһын онотоп уйнаған балалар үҙе һөйөнөс түгелме ни? Һәр хәлдә, күҙҙәрен бөтөрөп, телевизор, компьютер артында ултырмайҙар, сана шыуалар, саңғыла йөрөйҙәр, каток-ка баралар. Ҡыуаныстан башҡа бер генә лә һүҙем юҡ.

Төҙөлгән йорттарҙың етешһеҙлектәре бар икән, уларҙы бөтөрөргә була. Ә инде кемделер әрләп, һүгеп, һаман күктән төшкәнде өмөт итеп ятыуыңды дауам итһәң, әлбиттә, бер нәмә лә килеп сыҡмаясаҡ. Шуға күрә, яҡшы яҡтарҙы күберәк күрергә өйрәнәйек, кеше тупһаһында интегеп йөрөүгә беҙҙе онотмайыҡ.

**Гүзәл Вахитова, өс бала әсәһе:** "Үҙ йортом" программаһын бик күптәр өсөн ҡотҡарыу ҡулсаһы тип иҫәпләйем. Минең ғаиләм өсөн ул, ысын мәғәнәһендә, өмөтһеҙлөккә бирелгәндә ҡотолоу юлы булды. Ҡалала фатир һатып алыу өсөн мөмкинлегебеҙ юҡ ине, ә ипотека телдә генә матур яңғырай...

Программаға мин үҙем дә уйламаҫтан барып индем. Кемдәндер нимәлер ишеттем, телевизорҙан яңылыҡтарҙан күрһәттеләр. Һәм мин Интернет аша Президент исеменә хат яҙҙым. Шулай программаға эләктем.

Шамонинда майҙаны 56 квадрат метр булған өй алдыҡ. Былтыр майҙа күсенеп сыҡтыҡ һәм йәй дауамында өйөбөҙгә түкәтмә эшләнек. Хәҙер беҙҙең йортобоҙ 80 квадрат метр тәшкил итә. Ҡалала бындай фатир тураһында хыялланып та булмаç ине.

Күптәр программа еренә еткереп уйланылмаған, етешһеҙлектәре күп, тип әрләй. Барҙыр. Әммә "Үҙ йортом" бик шәп уйланылған. Мин мөмкинлектән файҙаланып ҡалғаныма бик шатмын. Был программаны тормошҡа ашыра башлаған Хөкүмәткә лә рәхмәтлемен. Күптәрҙән Шамонин ауылы тураһында бик йыш кире фекер ишетергә тура килә. Мин ундай кешеләрҙе аңламайым. Ҡыуанырға һәм эшләргә, төҙөргә кәрәк.

Миңә лә подрядсылар менән дә мөнәсәбәттәр асыҡларға, идара итеү компанияһы менән дә тартҡылашырға тура килде. Әммә үҙ өйөм бар - һәм был иң мөһиме!

Мин үҙем Өфө ҡыҙы, ошоға тиклем (миңә 31 йәш) шәхси йортта йәшәргә хыялландым. Хыялым тормошҡа ашты.

**Регина Сәлихова:** Проект ысын мәғәнәһендә яҡшы. Бигерәк тә бюджет өлкәһендә эшләүселәр өсөн. Күсемһеҙ милек баҙарында хаҡтарҙың тотороҡлолого тойолмай. Өфөлә фатирға һәм ипотека кредиты ставкаларына хаҡтар ҡот осҡос юғары. Ябай халыҡ банктан кредит алып ипотека түләй, үҙ теләге менән муйынын бурыс элмәгенә тығып, был йөктө 25 йыл һөйрәй алмай. Тере аҡсаға фатир һатып алыу тураһында хыялланырға ла ҡурҡыта. Ә "Үҙ йортом" проекты биш йылға 7-9 процент менән кредит бирә. Бюджет өлкәһендә эшләүсе бик һирәктәрҙең эш хаҡы айына 10 мең һум тәшкил итә. Вәғәҙәләр бюджет эшселәренә ниндәй ҙә булһа ышаныс осҡоно ҡабындырҙы - киләсәккә, дәүләт тарафынан аҙ ғына булһа ла яҡлауға өмөт уятты. Күптәр үҙ йорттарында йәшәй башланы, тормоштарының яңы битен асты, балалар таба, уларҙы тәрбиәләй, артабан ҡайҙа йәшәү тураһында хафаланмай.

Башҡортостанда йыл һайын 30 меңдән ашыу йәш ғаилә барлыҡҡа килә. Йәш ғаиләләр алдында торған иң ауыр мәсьәлә - торлаҡ проблемаһы. Торлаҡҡа шундай юғары хаҡтар һәм йәш ғаиләләргә ярҙам итеү темптарын анализлаһаң, тиҙҙән йәш ғаиләләр көрсөгө барлыҡҡа килеүе ихтимал. Һөҙөмтәлә тыуым кәмей, ярлы халыҡ ҡатламы арта. Республика етәкселегенә йәш ғаиләләргә төрлө яҡлап ярҙам итеү юлдарын эҙләргә кәрәк тип уйлайым, сөнки киләсәк беҙҙән тора бит.

Ә "Үҙ йортом" программаһын тормошҡа ашырыу һөҙөмтәһендә торлаҡ проблемаһы булған йәш ғаиләләр һаны 4 меңгә кәмене...

**Айгөл Суфиярова:** Мин ошо программаға эләгеүемә бик шатмын! Бындай суммаға үҙенә өй һалып сығыуы мөмкин булмаç ине. Эйе, ҡайһы бер йорттарҙың төҙөлөшөндә етешһеҙлектәр бар, әммә быға кем ғәйепле? УМС-мы? Улар һәр йорт эргәһендә йүгереп, төҙөүселәрҙең нисек эшләгәнен тикшереп йөрөргә тейешме? Хужалар үҙҙәре ғәйепле. Төҙөлөштөң һәр этабында барып, тикшереп, шунда уҡ етешһеҙлектәрҙе бөтөрөргә кәрәк ине. Нисек инде бер нисә ай йәшәп, урамдарға асфальт түшәүҙе талап итергә мөмкин. Атай-әсәйем Дүртөйләлә 10 йыл элек йорт һалғайны, урамдарында һаман асфальт юҡ, әммә йәшәйҙәр бит. Беҙгә лә берәү ҙә бер йыл эсендә бөтөн инфраструктураны эшләргә вәғәҙә бирмәне. Булғанына шөкөр итә беләйек.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Үҙ йортом" программаһы буйынса төрлө зарланыу һүҙҙәрен ишеткән һайын, Александр Пушкиндың алтын балыҡ тураһындағы әкиәте күҙ алдына килеп баҫа. Уның ҡыҫҡаса йөкмәткеһе шунан ғибәрәт: бабай алтын балыҡ тота, балыҡ уға үҙен ебәреүен, алмашҡа өс теләген үтәйәсәген белдерә. Бабай теләген әйтә, әммә ҡарсығы эргәһенә ҡайтһа, уныһы бабайҙы әрләп, кире балыҡ эргәһенә ебәрә. Балыҡ әбейҙең теләген үтәй. Бабай ҡайта, әммә әбейҙең нәфсеһе һаман туймай... Һөҙөмтәлә улар бабай менән элекке ергә һеңгән өйөндә, ярыҡ ялғаш эргәһендә тороп ҡала. Кемдер, бәлки, ишараны аңлап та бөтмәгәндер, әммә бөгөн Пушкин ҡарсығы кеүек күпкә өмөт итеп, үҙебеҙҙән һуң килгәндәргә был программаны ябып ҡуймайыҡ. Ә кемгәлер үҙ йорто оҡшамай икән - кирегә юл асыҡ: кеше тупһаһына ҡайт, ҡабат ятаҡ бүлмәләре юлла...**

Фекерҙәрҙе Зәйтүнә ӘЙЛЕ йыйҙы.

## БАТЫРҘАРҘЫҢ ИСЕМЕН БЕЛ!



# УРАЛТАУ ОСОРҒАН БӨРКӨТТӘР



## Заһиҙулла Ҡаҙнабаев

Заһиҙулла Мортаза улы Ҡаҙнабаев 1897 йылда Ырымбур губернаһы Орск өйәҙе 2-се Түңгәүер улысының Балапан ауылында (хәҙерге Йылайыр районы) тыуған. 1918 йылда башҡорт армияһында 1-се кавалерия полкында хеҙмәт итә. Башҡорт ғәскәрҙәре ҡыҙылдар яғына сыҡҡас, 1919 йылдың көҙөндә Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмө составында Петроградты һаҡлауҙа ҡатнашҡанлығы билдәле. Тимәк, 1919 йылдың йәйендә ул Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы менән Көньяҡ фронтҡа (Украинаға) Деникинға ҡаршы һуғышҡа ебәрелгән. Унан башҡорт ғәскәрҙәре Петроградҡа ташлана. 1920 йылда Башҡорт дивизияһының Петроград һуғышынан иҫән ҡалған ғәскәрҙәрен бер полкка туплап, Польша фронтына, Мортазиндың атлы бригадаһын тулыландырырға ебәрәләр.

Заһиҙулла Ҡаҙнабаев ошо рәүешле Польша фронтына, Мортазин бригадаһына барып эләккәндер, күрәһең. Бында ул 27-се Башҡорт кавалерия полкының Ш. Ғафаров етәкләгән 4-се эскадронында взвод командиры була. **1920 йылдың 6 июнендә Пиняево ауылы янындағы яу барышында З. Ҡаҙнабаев үҙенең взводы егеттәре менән флангынан һөжүм итеп, контратакаға күтәрелгән поляктарҙы, пулеметтарын ташлап, ҡасырға мәжбүр итә. Ошо батырлығы өсөн ул 1921 йылдың 17 февралендә Республика Реввоенсоветының 57-се һанлы фарманы менән Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ була.**

Демобилизацияланып, тыуған яғына ҡайтҡас, 1922 -1924 йылдарҙа Ҡаҙнабаев Йылайыр кантоны Түңгәүер улысының Сәлим ауыл Советы рәйесе вазифаһын башҡара. 1925-1927 йылдарҙа Сибай мәғдәнлегендә өлкән милиционер булып эшләй. 1930 йылда Баймаҡ районы Советы рәйесе итеп һайлана. 1932-1933 йылдарҙа ул Ленинградта милиция курстарында уҡып ҡайта. Артабан Ейәнсура районының милиция начальнигы итеп тәғәйенләнә. 1934 йылдан Баймаҡ районында төрлө яуаплы вазифалар (милиция начальнигы, ДОСААФ рәйесе һ.б.) башҡара.

1942 йылда ҡулға алына һәм милләтселек, совет власына ҡаршы енәйәтселектә ғәйепләнеп, 10 йылға иркенән мәхрүм ителә. Заһиҙулла Ҡаҙнабаев 1943 йылдың 27 майында Свердловск өлкәһендә төрмәлә вафат була.

Азат ЯРМУЛЛИН.

✓ *"Уй-й-й, ҡалай Өфөлә кеше һәйбәт икән ул. Мине танып торалар ҙаһа! Ана бит өйөмә алып ҡайтам тип торалар. Эй-й-й, ҡалай ғына бында кеше һәйбәт!"- тип һөйләнә-һөйләнә килеп ултырҙы атайым машинаға.*



# ҮПМӘЙҺЕҢ ДӘ

## үпһәм, ауыҙым

**Күптән инде Көлкө көнө тип йөрөтөлә 1 апрель. Һәр ваҡыттағыса, был ваҡиға беҙҙең гәзиттә лә сағылыш тапмай ҡалмай. Был юлы беҙ редакциябыҙға юморға бай әңгәмәселәрҙе - билдәле шағир, яҙыусы Риф Мифтаховты һәм Башҡортостандың халыҡ артисы Вәхит Хызыровты көлкөлө һөйләшеүгә саҡырҙыҡ. Улар менән әңгәмәне редакциябыҙҙың штаттан тыш юмористы Әхмәр-Ғүмәр Үтәбай алып барҙы. Көлкө табынында ҡатнашыусылар үҙҙәре һәм таныш-тоноштары менән булған ҡыҙыҡ һәм мәҙәктәрҙе иҫкә төшөрҙө. Булмаһа, күҙ һалайыҡ уларҙың әңгәмәһенә. Әлбиттә, был юмор оҫталарының үҙенсәлекле интонацияһын, мимикаһын, ҡыланышын ҡағыҙҙа күрһәтеп булмаһа ла, һөйләү стилен һаҡларға тырыштыҡ.**

**Ә. -Ғ. Үтәбай: Һөйләшеүҙе башлап, шуны әйтер инем. Совет заманында кеше факторы өҫтөнөрәк ине. Һәр нәмәнең: белем алыуҙың, һаулыҡ һаҡлауҙың, социаль шарттарҙың бушлай булыуы үҙе генә лә ни тора! Үҙгәртеп ҡороу мал факторын алға ҡуйҙы. Ауылдарҙа ерҙәр сәселмәй ята, унаң ҡарауы, көтөүлектәр күп. Малдарҙың тамағы туйып ҡалды. Больницалар ябылды, кеше дауалаусы врачтар юҡ. Ә бына мал врачы, үҙебеҙсә әйтһәк, ветврач, быуа быуырлыҡ. Кеше ауырып китһә, докторҙы икешәр көн көтөргә тура килә, ә мал ауырып китһен әле - 15 минутта килеп етә мал табиптары. Был хәл көлөрлөк тә, иларлыҡ та.**

**Риф Мифтахов:** Хәҙер мал кешегә ҡарағанда ҡәҙерлерәк шул. Кеше ҡазаланһа - ҡаза, мәшәҡәт, мал ҡазаланһа - табыш...

**Ә.-Ғ. Үтәбай:** Яҙ етһә, ауылдарҙа мал бестереү сезоны башлана. Беҙҙең ауыл ветврачтарының хәҙерге девизы: "Эсмәһәм - бесмәйем, бесмәһәм - эсмәйем". Ошо девиз менән эшләй беҙҙекеләр. Бына шул мал факторына бәйле ләкәп. Элегерәк беҙҙең яҡтан ике егет Йылайыр совхоз-техникумында ветврачлыҡҡа уҡып, диплом алып ҡайтҡандар. Бер инәй ауырып киткән һыйырын етәкләп, ветврачҡа китеп бара икән. Быны күреп ҡалған егеттәр: "Инәй, бына беҙ дипломлы ветврачтар, ыҙалап, унда алып барып йөрөмә, үҙебеҙ ҡарайбыҙ", - тип, инәйгә сумаҙандарын тотторып, һыйырҙы үҙҙәре ҡарарға булып киткәндәр. Икеһе ике яҡтан, береһе һыйырҙың ауыҙын астырып, икенсеһе ҡойроғон күтәреп ҡарап: "Һин мине күрәһеңме?"- тип ҡысҡырған. "Күрмәйем", - ти икән тегенеһе. Ауыҙ яғында торғаны ла шулай ҡысҡырып һораған. Шул рәүешле тикшергәндән һуң, былар инәйгә: "Юҡ, инәй, был һыйырығыҙ мал булмаҫ, һуйырға кәрәк",- тип кәңәш биреп ҡайтып киткәндәр.

**Вәхит Хызыров:** Бер шулай ауылға ҡайттым. Ҡапҡала Райхана апайымдың малайы Рөстәм генә йөрөп ята. "Рөстәм, олатайың ҡайҙа?" тип һорайым. "Әй, ул теге, ней, һыйырҙы үгеҙгә алып китте",- ти был. Ҡараһам, ҡапҡа ишеген шартылдата тибеп асып, һыйырҙың мөгөҙөнә уралған арҡанды шаҡарып тотоп, атайым инеп килә, үҙе һыйырҙы әрләй. "Һыйыр түгел был. Дүртенсе тапҡыр үгеҙгә алып барам. Кешенән оят, шул хәтлем оят. Дүрт тапҡыр алып барҙым, һаман үкереп ҡарап тик тора. Оят. Кеше һыйыры бер тапҡыр бара ла ҡайта, минең һыйыр дүртенсе тапҡыр бара",- тип асыуланып инеп килә.

**Ә.-Ғ. Үтәбай:** Бына Вәхит атаһы тураһында һөйләгәс, мин дә уның атаһы менән танышыуға бәйле хәлде иҫләнем. Бер мәл Вәхит Өфө урамы буйлап атаһы менән китеп барғанда осраштыҡ. Күрештек, мине атаһы менән таныштырып: "Бына был Әхмәр була, минең дуҫ, шағир",- тигән була инде. "Шиғырҙарҙы аны ней аны, мин дә яҙам, балта тота беләңме?" - тимәһенме атаһы көтмәгәндә. "Беләм", тием мин аптырап. "Улай булғас Вәхиттең өйөн күтәрәбеҙ баҡсаһында, балтаңды тот та шунда кил иртәгә",- ти. "Ярай", мин әйтәм. Барлығы ярты минуттай ғына булды был танышыу.

**Вәхит Хызыров:** Бер мәл атайым күстәнәскә ҡаҙ ите алып килгән. Кисен ултырып аш ашаныҡ. Ҡаҙға сират етте. Ҡаҙҙың эсенә алмалар, ҡара емеш тултырып, духовкала бешерҙем. Атайым был ҡаҙға ҡарап-ҡарап ултырҙы ла: "Ошоно ашайығыҙмы?"- тип һорай. "Ашайбыҙ", тием. "Һуң, мин ней аны ярты йыл көттөм дәһә, һеҙ уны бер ултырғанда ашайығыҙмы?". "Эйе". "Һуң, кеше улайтмай ҙаһа һуң, улым, улайтып йәшәһәң, мандый алмайһың даһа... Һуң ашҡа бит ошолайтып ҡына (ҡулының осон ғына күрһәтә) һыйыр итенә ҡушып, һурпа өсөн генә һалаң да һуң. Һуң былайтып ашаһаң, һуң... Уй, аллам!"- тип күҙҙәренә йәш алып ҡуйҙы хатта. Үҙемә уңайһыҙ булып китте. Ну уже бешкән бит инде, ҡаҙҙы телгеләп ултырттым да: "Атай, ашап ҡара, исмаһам",- тием. "Аның нимәһен ашайһың, ҡаҙ шул бер ҡаҙ инде ул", - тәки кәйефе булманы тегенең. Күпмелер ваҡыт үткәс, ауылдан посылка алып килделәр. Ҡараһам, ҙур ҡаҙ ята. Ул йылды ҡаҙҙар как раз ныҡ уңған ине. Ҡыуанып алып ҡайттым хәҙер, кәләштең тыуған көнөнә тултырылған ҡаҙ эшләрмен тип кенә йөрөй инем. Асып ебәрһәм... Ҡаҙҙарым бәләкәй-бәләкәй генә өлөштәргә бүленеп бөткән. Атайым турап ебәргән.

Мал темаһы тигәндә, атайым менән бәйле тағы бер-нисә ҡыҙыҡ һөйләйем әле. Бер мәле атайым күҙе ауыртып, Аврора урамындағы балнисҡа ятты, Мин уны алып барып һалдым да, үҙем гастролгә сығып киттем. Өс-дүрт көн йөрөп ҡайтылды. Киттем атай эргәһенә. Барһам, бүлмәлә атай юҡ, процедураларға киткән, күршеләре татар һәм урыҫ. Мин ингәс тә: "Нәрсә, синең әткәйең аттан башҡа хәбәрләр белмиме ни суң? Атны сөйли ҙә сөйли, иртәнге бишенче яртынан сөйли башли. Атларыгызның бөтәсен дә беләм, күршеләрегезнең, ауылыгызның бөтен атларын беләм. Аларның нәрсә ашаганын, нәрсә эшләгәнен, барсын да беләм хәзер", - ти татар ағайы. "Нет, слушай, ну на самом деле, ну я серьезно говорю, а. Вот с утра вот начинает про своих лошадей рассказывать. Ну я ж не могу, ну сколько так можно? Ну я устал слушать, вот четыре дня про своих лошадей рассказывает и рассказывает",- ти урыҫ. Шул саҡ атай ишекте асып килеп ингәйне, тегеләр шым булды. Атайым мине күрҙе лә шунда уҡ: "Ауылда нимәштәйҙәр?"- тип һорай. Үҙең һөйләш, тип, кейәүҙең номерын йыйҙым да телефонды атайға бирҙем. "Кейәү, арыумы, аттарым ни хәлдә?"- тәүге һорауы шул булды һәм артабан да хәбәр бары тик аттары тирәһендә барҙы. Нимә ашатырға, нисек ашатырға һәм башҡалар. Һөйләшеп, күңеле булды. Аҙыраҡ ултырғас, мин ҡайтырға сыҡтым. Коридорға сығып, палата ишеген ябып та өлгөрмәнем, атайым тегеләргә: "Бына ауылға шылтыраттым әле, аттарҙы һораштым. Аттарым һәйбәт, ти былай. Ашауҙары ла һәйбәт, ти",- тип һөйләй ҙә башланы.

Бер шулай йәйгеһен бейә менән бесән ташыйым. Тегеләй-былай һигеҙ рейс яһаным көнө буйы. Үҙем арыным, минән бигерәк атым арыны. Ҡапҡаның ситендә күрше Истамғол мулланың аты тора. Иртән тора ине башын болғап, себен ашатып, беҙ һигеҙенсе рейс эшләгәндә лә тора был. Ҡайтып киләбеҙ тағы ла, бейә тегенегә "Йәллә инде мине, арыным бит", тигән һымаҡ ҡараған була. Бейәнең ҡарағанын күреп ҡалды ла атайым: "Һин аныға ҡарама, һин бит эшкә шәп, ул лудырь!"- тигән була. Бейәне волнует что ли уның лудырмы-юҡмы икәнлеге!

Ағайымдың "һуғып" ала торған ғәҙәте бар ине. Әсәйем, ҡайт, ағайың менән һөйләшеп кит, тип хат яҙған. Ҡайтып киттем. Баҡса аша өйгә табан атлайым. Кәртүк баҡсаһынан үтеп барһам, атайҙың тауышы яңғырай. Кемдәндер кәрәген бирә генә әй. "Мин һиңә әйттем бит, ҡабат шунда йөрөһәң... Күпме әйттем мин һиңә, Тупаҡҡа барма тип! Анау көндө лә йөрөнөң, өс көн Михайловскийҙа йөрөп ҡайттың. Һуң кеше шулайтамы әй, уй Аллам! Бына өс көнө буйы әпәт Тупаҡта йөрөнөң. Һуң үҙең беләң дә һуң әй, унда бит кеше ямандаһаң, әй! Үҙең беләндәһә һуң әй! Күҙемә ҡара, һинең менән һөйләшкәндә!" Ағайҙы әрләй икән был тип уйлайым бит инде. Шым ғына һарайға инеп ҡараһам... Атайым атты әрләй!.. Тегенеһе башын эйеп, күҙҙәрен ғәйепле генә итеп мөлдөрәтеп, атайыма ҡарап-ҡарап алған була.

Ауылда мал күп бит инде. Атайымдың да аттары, һыйырҙары, һарыҡтары - бөтәһе лә бар. Һыйырҙарының бөтәһенә лә бер үк исем - "Машка" тип ҡушып бөткән был. Минең кәләштең исеме лә Мария, Маша, бит инде. Таныштырырға алып ҡайттым хәҙер. Кисен көтөү ҡайта башланы. Атайым йүгереп сығып "Э-э-э, ней, Зинка, Зинка!" тип һыйырҙарын саҡыра башлаған булды. Килененән уңайһыҙланып, "Машка" тип әйтергә ҡыймағандыр инде. Ә "Зинка" тигәнгә малдарҙың иҫтәре лә китмәй, мин "Машка" тип саҡырғайным, килеп тә еттеләр.

**Ә.-Ғ. Үтәбай:** Минең дә атайым мәрхүмгә бәйле ҡыҙыҡлы ваҡиғаларҙың береһе. Кеҫә телефондары барлыҡҡа килгәс, атайға телефон алып бирҙем. Элек ҡайтһам, һөйләшеп һүҙ бөтмәй торғайны, бер туҡтауһыҙ аралашыбаҙ. Телефон алып биргәйнем, телефондан көн дә шылтырата. Аҡсаһы күп бабайҙың. Шылтырата ла, ауылдың бер башынан алып икенсе осона тиклем булған бөтә ваҡиғаларҙы һөйләп сыға. Шунан һуң сәйәсәткә төшөп китә. Өҫтәгеләрҙе, Кремлде әрләй. Шулай бер мәл ҡала советына кәңәшмәгә барҙым. Телефонды һүндерҙем. Һүнгән телефонға шылтыратһалар, ул башта урыҫ телендә "Абонент недоступен" ти ҙә, унан инглиз телендә "... кавеа чивео..." тип тәржемә итеп ҡуя.. Кәңәшмәнән сығып, телефонды ҡабыҙғас, атай тағы шылтырата. "Ҡайҙа йөрөйөң ул? Бер туҡтауһыҙ шылтыраттым. Анау мәрйәң башта урыҫса "Ул юҡ" тип әйтә лә, аҙаҡ "Улың ҡайҙалыр эсеп йөрөй" тип әйтеп ҡуя. Ыҫҡындыңмы әллә?" ти был. "... кавеа чивео..." тигәнде "ҡайҙалыр эсеп йөрөй" тип аңлаған икән атайым.

Телефонлы булғаны бирле атайым ауылға ҡайтһам, "Һаумы ла, иҫәнме"нән башҡа һүҙ өндәшмәй. Ауылда ике-өс көн булғас, машинаға ултырам да сығып китәм. Ауылдан сыҡҡас ҡына телефон шылтырай. "Һин ҡайһы тирәлә бараң әле? Мин һиңә бер хәбәр әйтергә онотҡанмын бит әле", ти. Машинаны ситкә бороп туҡтатам, ул 15 минут һөйләй ҙә, мин артабан китәм. Шулай телефон аша ғына һөйләшәбеҙ, ә былай һөйләшмәйбеҙ.

**Риф Мифтахов:** Атайым менән бәйле ҡыҙыҡ ваҡиғаны һөйләйем әле. Мин һуң өйләндем бит инде. Ну маҙаға тейәләр бит, ҡайтҡан һайын "Давай, килен алып ҡайт!" тиҙәр. Туғандар бергә йыйылһа, бигерәк килештерәләр инде. Шулай бик аптыратҡас, "Алып ҡайтам, алып ҡайтам" тием. Атайым бик ышаныусан кеше, ышанған хәҙер. Бер мәл: "Беҙ килен менән көтәбеҙ",- тип хат яҙған. Ниндәйҙер ҙур байрам етеп килә ине. Мин әйтәм: "Атай, улай ҙур байрамға ла эләккәс, беҙ былай ғына ҡайтмайбыҙ инде. Аэродромда вертолет һөйләштем, вертолет менән ҡайтабыҙ". Мин әйттем дә оноттом. Күпмелер ваҡыт үтте. Бер шулай ауылға ҡайтып, сабынлыҡҡа барҙыҡ. Сабынлыҡ тап-таҙа. "Таҙарған даһа был", тием. "Һуң, улым, теге ваҡыт вертолет менән ҡайтһаң, төшөр урын кәрәк булыр тип таҙартып бөттөм", ти атайым. Ул, баҡтиһәң, беҙгә аэродром әтмәләп ҡуйған икән.

**Вәхит Хызыров:** Бер мәл шулай атай Өфөгә килде. Барҙым вокзалға ҡаршы алырға. Беҙҙең яҡтар поезд менән йөрөй бит инде Өфөгә. Килеп төштө ҙу-у-ур рюкзак тотоп. Ит тултырып алған. Китеп барабыҙ хәҙер машинаға табан. Унда аҙым һайын таксистар бит инде. "Абый, исәнмесез, исәнмесез! Әйдә, үзегезне алып барып куям. Өйөгөзгә хәтлем алып барып куям", "Айда, садись, быстро доедем до дома. Идем, идем!" тип атайға ҡысҡыралар былар. "Уй-й-й, ҡалай Өфөлә кеше һәйбәт икән ул. Мине танып торалар ҙаһа! Ана бит өйөмә алып ҡайтам тип торалар. Эй-й-й, ҡалай ғына бында кеше һәйбәт!"- тип һөйләнә-һөйләнә килеп ултырҙы атайым машинаға.

**Риф Мифтахов:** Бала саҡта 1 апрелде алдашыу көнө тип ҡабул итә торған инек беҙ. Бөгөн генә уны көлкө көнөнә әйләндереп, ҙурайтып ебәрҙеләр. Малайҙар менән бер-беребеҙҙе алдаған булып, шунан ҡыҙыҡ табып, үҙ-ара кем кемде нисек алдағанын һөйләп йөрөй инек. Минең шулай бер заман башҡа бер уй килеп, бер инәйҙе алдарға булдым. Элек бит ауылда бер-нисә урамға бер мун-

***✓ "Тапҡандар бынау ҡыҙыу бесән мәлендә звание бирергә! Юҡ, юҡ, улай булмай, бесәнде эшләп бөтәң дә шунан бараң! Хәҙер һәр бер минута дорога. Бесәнде ташлап ҡайҙа китәң!" - ти бит был. Саҡ күндерҙәк.***

са була торғайны. Беҙ Тимерғәле тигән ағайҙың ерҙе соҡоп эшләнгән мунсаһына яғып йөрөйбөҙ. Бер яҡһаң, йылыһы оҙаҡҡа етә ине. Беҙҙән һуң эҫеһе ҡалһа, урамдағы бернисә әбейгә әйтәбеҙ. 1 апрелдә ошо инәйҙәрҙең береһен алдарға булдым. Алдағас, ныҡлап алдарға кәрәк, тип уйлайым инде үҙемсә. Тайфа инәйгә барып: "Инәй, мунса яҡтыҡ, эҫе сағында барып төш",- тинем дә үҙем тура өйгә ҡайтмай, оҙаҡ ҡына урамда уйнап йөрөнөм. Кисләп кенә ҡайтып инһәм, әсәйем ишек төбөндә мине асыуланып көтөп тора: "Һин ни эшләп улай оло инәйҙе алдап, яғылмаған мунсаға саҡырып йөрөйһөң?"- ти. Мин үҙемдең бында ҡатнашлығым юҡлығын иҫбат итеп маташам. Әсәйем: "Оло кеше үҙе алдап йөрөй булып сығамы инде? Тайфа инәйең мунсаға барған, сисенеп, эләүкәгә менеп ултырған, һыу һала икән дә, таш шыжламай ҙа ҡуя икән. Әллә күпме ултырҙым, өшөп бөттөм дә, әллә икенсе мунсаны әйттеме икән тип, һеҙгә белешергә индем

әллә 9-сы, әллә 10-сы синыфта уҡып йөрөгән, танауға еҫ инә башлаған саҡ. Ауылда килгән ҡыҙҙарҙы оҙатыу йолаһы бар бит инде. Һәр егет оҙатып ҡуйыуҙы изге бурысы һанай. Мин дә шулай. Был һылыуҡайҙы оҙатырға күмәкләшеп китәбеҙ хәҙер. Бара торғас, мин генә тороп ҡалам бит бының менән. Минең оҙатыу шул, ҡапҡа янына еткәс: "Һау булып тороғоҙ",- тигән булам да ҡайтыу яғын ҡарайым. Фатирға төшкән Гөлғәйшә апай мине өйгә саҡыра. Ҡайҙан инде, мин оялып инмәйем, ҡайтҡан булам да шиғыр яҙам. Шулай бер осрашҡанда теге ҡыҙ иртәгә ҡайтып китәсәге тураһында еткерҙе. Был уның "Оҙатырға кил" тип ишаралау икәне аңлашылып тора бит инде. Ләкин бе-

көндә беҙ малайыбыҙҙы йә ҡыҙыбыҙҙы бергә оҙатып йөрөр инек. Әйҙә, яҙ яуап, мөхәббәтебеҙ яңынан тоҡаныр", тигән булам тегегә. "Ярай, ҙур итеп яҙырмын", тип адресты алды. Күпмелер ваҡыт үткәс, ҙур төргәк алып килеп бирҙеләр. Ҡағыҙҙарҙы һүтәм-һүтәм, һүтеп бөтөп булмай бит. Шулай тағата торғас, бәләкәй генә ҡағыҙ киҫәге килеп төштө. Унда шундай юлдар бар:

*(Ы)шкафымды биҙәп тора,*
*Одеколон шешәһе.*
*Һөйәм тигәс һөйәм әле,*
*Суҡынып китһен бисәһе.*

Бына шулай оҙаҡ йылдарға һуҙылған көлкөлө ваҡиға булды минең менән. Хәҙер ул әбей ҡайҙа йөрөгән булалыр инде?

**Вәхит Хызыров:** Мөхәббәткә килгәндә.

һөйләй. Сыҡҡан былар ярға ҡултыҡ аҫтарына берәр ҡарбуз ҡыҫтырып. Сыҡһалар, кейемдәр юҡ. Хәҙер нисек ҡайтырға ҡарбуз менән, кейемһеҙ ҡыҙҙар янына барып булмай бит инде. Бөтөнләй икенсе юл менән, элекке зыярат урынлашҡан ерҙән теҙелешеп ҡайтырға сыҡҡан былар. Ай яҡтыһы. Шулай китеп барғанда, ҡаршыларына төнгө ат ҡарауылсыһы Хисаметдин ағай килеп сыҡҡан. Быларҙың ҡиәфәт ҡот осорлоҡ бит инде. Кейемһеҙ, тән ялтырап тора, ҡултыҡ аҫтарында ҡарбуздар, үҙҙәре күмәк. Хисаметдин ағайҙың аты ҡурҡып, сабып сығып киткән йән фарман. Ағайҙар урап-урап йөрөп, иртән генә ҡайтып еткәндәр. Ағайҙар кейемдәрҙе кем урлауын аңлаған, әлбиттә. Минең әсәй ҙә: "Был Рәйес менән Рифтең генә этлеге, беләм

алырға Өфөгә ҙур "Икарус" автобусы ебәргәндәр. Ә яҙыусылар ни өсөндөр осрашыуға барырға йыйыла алманы. Мин һәм Әнисә Таһирова ғына килгәнбеҙ. Китеп барабыҙ икәүләшеп ҙур автобусҡа ултырып. Әнисә водителгә әйтә: "Беҙҙе ситтәрәк төшөрөп ҡалдыр инде, уңайһыҙ бит, йәйәүләп барырбыҙ", - ти. "Юҡ, мин әйтәм, билдәләнгән ергә барып етәбеҙ. Был ергә тиклем килеүен килеп еткәс, мин - Мостай Кәрим, һин - Зәйнәб Биишева. Күкрәк киреп барып төшәбеҙ",- тим. Барып төштөк, ҡаршы алдылар матур итеп, ниңә икәү генәһегеҙ, тип һораманылар.

**Вәхит Хызыров:** Беренсе тапҡыр исем алғанда булды был хәл. Башҡортостандың атҡаҙанған артисы исемен йәй бирҙеләр. Ауылда бесән сабып йөрөйөм, бер заман Өфөнән, иртәгә 9.30 сәғәттә Хөкүмәт йортонда булырға тейешһең, тигән телеграмма килеп төштө. Атайҙың холҡон беләм бит



# ТИЕП ҮПКӘЛӘМӘ,

## яман өйрәнә…

әле. Ҡайһы мунсаға барырға икән, тип беҙгә килгән". Әсәйҙән ныҡ эләкте былай, ләкин атайға әйтмәне. Ул саҡта миңә бигерәк ауырға төшөр ине был алдау. Шул саҡта әсәйемдең "Һәр һүҙҙең дә самаһы бар" тигәне ныҡ хәтерҙә ҡалған. Ошонан һуң мин ололарҙы алдауҙы бөтөнләй онोттом.

**Ә.-Ғ. Үтәбай:** Мин дә бер саҡ 1 апрелдә Бибинур апайым менән бергәләп минең класташтарымды алдарға булдыҡ. Ул ваҡыт беҙ башланғыс класта уҡыусылар тыуған көндәргә саҡырыша торғайныҡ. Апайым өйҙән-өйгә йөрөп, класташтарымды минең тыуған көнгә саҡырып сыҡты. Бер мәл ҡунаҡтар туптырлашып килеп инделәр. Беҙ урындыҡ аҫтына "шылт". Өйҙә бер кем дә юҡ бүтән. Ҡунаҡтар ишек төбөндә тапанып торҙо-торҙо ла ҡулдарындағы бүләктәрен (юйғыс, дәфтәр, линейка, 3 тин аҡса, һ.б.) урындыҡ ситенә һалып, шым ғына ҡайтып киттеләр. Хәҙер был хаҡта уйлаһам, бик ҡыйын булып китә.

**Йәш саҡ - мөхәббәтле саҡ. Әйҙәгеҙ, йәшлек, мөхәббәткә бәйле ҡыҙыҡлы ваҡиғаларҙы иҫләп алайыҡ әле.**

**Риф Мифтахов:** Бер ваҡыт беҙҙең ауылға Стәрлелә педучилищела уҡыған ҡыҙҙы практика үтергә ебәргәндәр. Минең

сән ваҡыты. Ҡыҙ оҙатырға барам, тип атайҙан һорап китеп булмай ҙа инде. Ебәрмәйәсәктәр ҙә. Шулай оҙата алманым, ҡайтып киткән. Барһам, Гөлғәйшә апай теге ҡыҙыҡайҙың минең килеүемде көтөүен еткерҙе. Көтөп ала алмағас, яҙыу ҡалдырған.

*Шиғыр яҙып ятҡанһыңдыр,*
*Оҙатырға килмәгәс.*
*Хәйер, ниңә килеүҙәрең*
*Үбешә лә белмәгәс, -*

тип яҙған. Эй, сәмгә тейҙе был. Был тарихтың аҙағы ҡыҙыҡ әле ул. Ваҡыт үтте, мине армияға алдылар. Армияла шул уҡ ауыл, ҡыҙҙар хаҡында уйланыла бит инде. Мин хәҙер теге ҡыҙға хат яҙырға булдым. "Һеҙҙең шиғырға яуап итеп йыр яҙҙым" тинем дә хат яҙып һалдым. Ул былай яңғырай ине:

*Ҡарағай ҙа тигән оҙон ағас,*
*Саналарға һалһаң һөйрәлә.*
*Үпмәйһең дә тиеп үпкәләмә,*
*Үпһәм ауыҙым яман өйрәнә.*

Ебәрҙем хатымды, яуап булманы. Йайлап онотолдо был ваҡиға. Йылдар үтте. Бер ваҡыт улым БДУ-ға уҡырға инеп йөрөй. Улымды көтөп, БДУ алдында йөрөп ятһам, бер ҡатындың йылмайып миңә ҡарап торғанын һиҙҙем. Йөҙө таныш кеүек, барҙым янына. Теге мин ауылда оҙатып йөрөгән уҡытыусы ҡыҙ булып сыҡты. "Эй, бына бит донъя нисек? Теге ваҡыт хатыма яуап яҙһаң, бәлки, ошо

Хәҙер мин аптырайым үҙемә. Йәшлекме ул, алйотлоҡмо? Бына уйлап ҡарағыҙ әле, беҙҙең ауылдан Ҡырҡты тауы егерме нисә километрҙа ята, шуны аша төшкәс, беҙҙең сабындыҡ. Шул сабындыҡта беҙ бесән сабабыҙ. Бесән сабып бөтәм дә, кискеһен һөйгән ҡыҙымды бер үбер өсөн ауылға ҡайтам арып. Төн буйы йөрөп, йәйәүләп, урман-тауҙар аша киренән китәм сабындыҡҡа. Ана шулай алыҫ саҡрымдарҙы тегеләй-былай йөрөп, башҡорт ҡыҙҙарына мөхәббәтем өҙөлөп ҡуйып, мәрйәгә өйләндем инде. Шул тиклем саҡрымдар үт әле бер үбешер өсөн генә.

**Риф Мифтахов:** Мут саҡтарҙың тағы ла бер ҡыҙыҡ ваҡиғаһы иҫкә төштө әле. Ағайҙарыбыҙҙың егет сағы, дуҫым Рәйес менән беҙ бәләкәйерәкбеҙ. Йәй көнө барыһы ла ырҙында бит инде. Йәштәр төнгөлөккә лә ҡала. Бер саҡ Рәйес менән ағайҙарыбыҙҙың төнөн ҡарбуз урларға йөрөүен белеп ҡалдыҡ та быларға эйәрергә булдыҡ. Беҙҙе алып барманы былар. Тегеләрҙән үс алырға ҡарар итеп, киттек арттарынан шым ғына. Ҡарбуз үҫкән баҡсаға, сисенеп, йылға аша йөҙөп сығырға кәрәк. Сисенделәр былар, йөҙөп киттеләр. Беҙ шуны ғына көтөп тороп, ағайҙарҙың кейемдәрен йыйып алып, һәр береһенең өй ҡапҡаһына алып ҡайтып бәйләп ҡуйҙыҡ та, үҙебеҙ аҙбар башына йоҡларға яттыҡ. Икенсе көн ағайым ваҡиғаларҙың нисек булғанын

мин", - тигән. Аҙбар башынан һөйрәп төшөрөп, кәрәкте бирҙеләр генә әй. Ә Хисам ағай иртән иртүк эштән сығыу тураһында ғариза яҙған һәм нисек кенә өгөтләһәләр ҙә, хәлде аңлатһалар ҙа, был уйынан кире ҡайтмаған. "Зыяратта үҙ күҙҙәрем менән өс эсле әллә күпме кешене күрҙем", тип тик тора икән.

**Ә.-Ғ. Үтәбай: Сәнғәт, әҙәбиәт донъяһы менән бәйле ҡыҙыҡтарығыҙ ҙа бар бит инде һеҙҙең. Вәхит, һин Ҡытайға барып ҡайтҡайның. Унда нисек булды, ҡытайҙар Башҡортостандың халыҡ артисы Вәхит Хызыровты таныйҙармы һуң?**

**Вәхит Хызыров:** Танынылар ти, танымай ҙа. Ҡытайҙың бер ҡалаһында үҙ концертыма индермәй маташтылар хатта. Бөтә делегация инеп киткән, мин архитектураға һоҡланып йөрөп, артта тороп ҡалғанмын. Инәйем тиһәм, һаҡсылар ҡулдарын арҡыры ҡуйып индермәйҙәр бит мине. Үҙҙәренсә әллә нимә һөйләйҙәр, етмәһә. Мин: "Концертыма килдем дә инде", - тим. Юҡ, әй, ҡыбырламайҙар ҙа. "Мин Әбйәлилдән килдем, үҙемдең концертым, бына!" тип паспортымды сығарып күрһәттем. Аптырай тегеләр, йөҙ минең ҡытайский бит тоже. Улар үҙҙәренеке тип уйлаған. Саҡ өлгөрөп ҡалдым сәхнәгә сығырға.

**Риф Мифтахов:** Бер шулай Ишембай районы яҡташ яҙыусы-шағирҙарҙы йыйырға булды. Билдәләнгән көндә беҙҙе

инде. Был хәбәрҙе кискеһен, бесәнде сабып бөткәс кенә әйттем. "Атай, миңә исем, миҙал, диплом биргәндәр. Мин барып ҡына ҡайтайым әле Өфөгә. Иртәгә иртән алам да кискә әйләнеп тә ҡайтам",- тим. "Тапҡандар бынау ҡыҙыу бесән мәлендә звание бирергә! Юҡ, юҡ, улай булмай, бесәнде эшләп бөтәң дә шунан бараң! Хәҙер һәр бер минута дорога. Бесәнде ташлап ҡайҙа китәң!" - ти бит был. Саҡ күндерҙәк. "Ана, ҡышҡыһын бирһендәр звание, көҙгөһөн бирһендәр! Әйҙә ай һайын бирһендәр шул ваҡытта. Нимә, именно минең бесән ваҡытында бирәләр? Ты смотри, икенсе ваҡыт Мортаҙаға әйт, звание-маҙар бирһә, ҡышҡыһын бирһен",- тип тороп ҡалды. Халыҡ артисы исемен инде апрелдә бирҙеләр.

**Шулай итеп, көлөү ғүмерҙе оҙайта икәнлеген яҡшы беләбеҙ. Ләкин үҙең генә шаяра белгәндә түгел, ә башҡаларҙың да шаяртыуын аңлай белгәндә генә көлөү тормошта ҡыуаныс килтерер һәм позитив тулҡындарға көйләр. Ысын күңелдән көлөү, эскерһеҙ йылмайыу, бөтә йөрәктән шатлана белеү һәләте тормошобоҙға йәм, йәшәйешебеҙгә нур өҫтәүсе онотмайыҡ, дуҫтар. Көлөү һәм һәйбәт кәйеф һәр ваҡыт тормошоғоҙҙа йәнәшә атлаһын.**

**Көлкө табынындағы әңгәмәне Гөлназ САФУАНОВА яҙып алды.**

БАЛАЛАР ҺӨЙЛӘЙ



# ТУРА ЯРЫП ҠЫНА...

Һеңлемә 4 йәш ине. Төшкө аш ваҡытынды атайым менән әсәйем һүҙгә килешеп китәләр. Һеңлем уларға иғтибар итмәй, ашауын дауам итә икән. Күрәһең, оҙағыраҡҡа һуҙылғандыр һүҙ көрәштереү. Күпмелер ваҡыт үткәс, һеңлемдең атайыма ҡарап әйтелгән тауышы (ә тауышы уның көр, көслө була торғайны) яңғыраған: "Ул һинә ҡатын түгелме әллә (баҫым "ҡатын" һүҙенә, атап әйткәндә "ы" хәрефенә төшә)? Ярты һүҙҙә туҡтап ҡалған атай-әсәйем был хәлдән һуң бер ҡасан да һүҙгә килешмәнеләр. Һәр хәлдә беҙҙең алда.

* * *

Ике туған ҡустым кәләш алырға йөрөй. Өйҙә туйға ҡыҙыу әҙерлек бара. Тик 3 йәшлек Арыҫлан ғына был мәшәҡәттәргә әллә ни әһәмиәт бирмәй, үҙенең эштәрен барыһынан да юғарыраҡ ҡуйып йөрөп ятҡан көнө. Һәр ерҙән ҡыҙыҡ эҙләп йөрөүсе еҙнәйем Арыҫландан һорап ҡуя: "Арыҫлан, ниңә өйҙә шулай кеше күп ул?"Шуны ла белмәйһеңме ни тигәндәй ҡарап ҡуйғандан һуң Арыҫлан: " Ағайым кәләшкә сыға бит", - тип яуап биргән.

* * *

Ҡустым бәләкәй сағынан аҡса һанарға ифрат шәп. Шулай беренсе синыфта уҡып йөрөй. Еҙнәйем Илнурҙан өскә икене ҡуштыра алмай икән. Тегелэй ҙә һорап ҡарай, былай ҙа, төрлө миҫалдар ҙа килтереп ҡарай, юҡ инде, дөрөҫ яуап ала алмай. Аптырағас:"Өс һумға ике һумды ҡушһаң..." Ҡыҫҡаһы, һорауын аҙағына тиклем әйтеп тә бөтөрмәй, "биш һум" тигән яуап ала.

* * *

Район үҙәгенән ауылға күскән генә сағыбыҙ. Миңә уйнарлыҡ ҡыҙҙар булһа ла, күрше-тирәлә 4 йәшлек һеңлем өсөн бер генә тиңдәше лә юҡ. Бөтә урамда уның йәшендәге малайҙар ғына. Һеңлем шулар менән уйнай. Бер көн ҡайтып инде лә ифрат етди төҫ менән: "Бер Таһир ғына ҡалды туҡмалмай!" - тип хәбәр һалмаһынмы! Баҡтиһән, килгән көндән алып көн дә бер малайҙы туҡмап ҡайтара икән, ә Таһирға, ҙурыраҡ булыу сәбәпле, көсө етеңкерәмәгәндер инде. Ләкин нисек кенә булмаһын, Таһирға ла һеңлемдең тос йоҙроғон татырға тура килде. Бөгөнгө көндә аралашып йәшәйҙәр барыһы ла, тик Таһир ғына иртә китте араларынан...

* * *

Ағайымдың ҡарағусҡыл йөҙлө, Азамат исемле, барыбыҙ ҙа бик яратҡан малайы бар. Шулай, туғандар йыйылған саҡ. Апайым 3 йәшлек Динәгә матур күлдәген кейҙереп маташа, Азамат эргәләрендә ҡарап тора икән. Динә Азаматҡа оҙаҡ текләп торғандан һуң: "Әсәй, ә Азамат ағайым тигрмы?" - тип һорап ҡуйҙы. Тигр тигәне негрҙы аңлата икән...

**Наҗгөл САФИУЛЛИНА.**

* * *

Мин мейес ағартып йөрөйөм. Өҫкө урләргә буй етеңкерәмәгәс, плитә өҫтөнә ҡағыҙ йәйҙем дә шунда баҫып эшләй башланым. Ә минең һәр аҙымымды күҙәтеп торған дүрт йәшлек Нәркәс:

- Өләсәйем Емеля булды, - тип ҡысҡырып та ебәрҙе.

* * *

- Бәпәйегеҙҙе алып ҡайтайым әле, - тине инәһе Нәркәскә шаяртып.
- Үҙегеҙ аҡса йыйығыҙ ҙа алығыҙ. Атайым аҡсаны былай ҙа саҡ тултырған, - тине Нәркәс ололарса.

* * *

Ирәмәндең әсәһе менән Рәсүл ағаһы бер туған. Ирәмән ҡайһы яғы менәндер Рәсүл ағаһына бик оҡшаған, үҙе лә уны ярата, уға оҡшарға тырыша ине. Ағаһының әсәһе менән бала сағында төшкән фотоһын Ирәмәнгә күрһәттем дә:

- Был кем? - тип һорайым Рәсүлгә күрһәтеп.
- Мин, - ти Ирәмән (4 йәш).
- Ә быныһы кем? - тим әсәһенә төртөп.
- Быныһы әсәйем, бәләкәй сағында, - тип яуапланы Ирәмән.

**Зарифа АБЫҘБАЕВА.**
**Бөрйән районы.**

АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО







## Әбидне булыр инде

Ике ҡатын һөйләшә. Береһенең ире эсеп ағыуланып үлеп ҡалған, икенсеһенең ире, эсеп, ғәүғә күтәреүҙән бушамай.

- Бөгөн балаларҙың пенсияһы килде, әлдә шул пенсия бар әле.
- Күпме алаһың?
- Өс балаға ни - байтаҡ.
- Һин миңә ҡарағанда бәхетлерәк әле, - ти икенсеһе уфтанып. - Исмаһам, пенсия килеп тора. Минеке үлмәй ҙә бит! Алимент та юҡ, шурт та юҡ. Үлһә, аҡсаһын алып кинәнер инек.
- Мин дә шулай тип теләй торғайным. Ҡабул булды былай. Эскелектән бер ыҙала, аҡса юҡлыҡтан тағы... Былай, шөкөр, китеп ултырыуы, асланғас түгелбеҙ.
- Минеке үлмәй, балаларының үҫеп етеүен көтәлер инде. Улар ир еткәс үлһә, әбидне булыр инде.

## Бөтәгеҙ ҙә дауаланһа...

Береһе сәмәй һатыусы, икенсеһе "йоторға" яратыусы ике әхирәт һөйләшә:

- Эй, әхирәт, шул сәмәй тигән нәмәне "инде ҡабат тотмайым" тип уйлаһам да тура килә бит. Бер башлаһам, ана тора инде - ысҡыныла.
- Шулай шул. Һис сама тигән нәмәне белмәйһең.
- Әллә кодировкаға барып ҡайтаһы инде, 3-4 кеше бер машина яллап барғанда осһоҙға ла төшөр ине.

- Ҡуй, ҡуй, ни һөйләйһең? Барһаң, үҙең генә бар, кеше ҡотортоп йөрөмә.

## Небирилик болғама

Ҡолғана халҡы Магнитогорск ҡалаһына йөрөргә ярата. Элек тә шулай булған, хәҙер ҙә шулай. Исеме менән әйтмәйҙәр, город тип кенә йөрөтәләр. Шулай, Ғәйниә исемле еңгәй "город"ҡа кәзә ите һатырға барған. Көнө буйы торған ул. Килеп, итте болғап-болғап ҡарайҙар ҙа итен алмай китәләр икән. Ахырыһы, Ғәйниә инәйҙең түҙемлеге бөткән.

- Бирилек бири, не бирилек болғама, - тип ысҡындырған ул итен әйләндереп-тулғандырып ҡарап тороусы мәрйәгә.

## Оҡшаш кеше

Наҡыя исемле инәй ҙә "город"ҡа бара һәм бер магазиға инә, ә унда ҙур көҙгө тора икән. Наҡыя инәй үҙен көҙгөнән күргән дә, "Атаҡ-атаҡ! Бында ла миңә оҡшаған кеше бар икән", тип хайран ҡалған.

## Ҡаҙан буш түгел

Беҙ ғаиләлә биш бала үҫтек. Әсәйем хаҡлы ялға сыҡҡансы һатыусы булып эшләне. Беҙ магазинға инеп, уның эшен ҡыҙҙатеп торорға ярата инек. Шулай бер көндә апайым менән мин магазинға килдек. Беҙ килгәндә ағайым шунда тора ине инде. Күп тә үтмәй, Мәймүнә һеңлем иң кескәйебеҙҙе - Сәкинәне эйәртеп килеп инде.

Әсәйем бер аҙ һуҡрана биреп:

- Ҡаҙанды ла алып килһәгеҙ ней була, - тине лә эшен дауам итте.

Мәймүнә шым ғына магазиндан сығып китте. Бер аҙҙан ул кире әйләнеп килде һәм прилавка янына әсәйем ҡаршыһына барҙы ла:

- Әсәй, ҡаҙандарҙың икеһе лә буш түгел, әпкилеп булманы, - тине. Кешеләр көләшә башлағас, үҙе боролоп сығып китте.

## Сәтәкәй эҙләйем

Мәймүнә менән Сәкинә бергә уйнап үҫте. Нисәмә ҡарама, йылға буйында булырҙар ине. Бер ваҡыт яланаяҡ һыу кисеп йөрөгәндә Сәкинә аяғын нимәләр баҫып ауырттырған һәм:

- Ой, сәтәкәйем өҙөлдө, - тип илай башлаған. Сәкинәнең илауын күреп, яр буйынан үтеп барыусы Таңһылыу исемле апай боролоп килеп, уларҙың икеһен дә һыуҙан сығарған да Сәкинәнең аяғын ҡарай башлаған. Ә Мәймүнә ул арала кире һыуға төшкән һәм унда нимәләр эҙләп маташа икән.
- Мәймүнә, нимә эҙләйһең, берәй әйберең юғалдымы? - тип һораған Таңһылыу апай аптырап.
- Сәкинәнең өҙөлгән сәтәкәйен эҙләйем, табып булмай, - тип яуаплаған Мәймүнә.

**Зәйтүнә АЙЫТБАЕВА.**
**Ҡолғана ауылы.**




## Кем белә

Пенсияға сығыр өсөн документтарын теүәлләп йөрөгән инәйҙән һорашалар икән:

- Йә, пенсионныйҙа нимә тип ҡайтарҙылар?
- Нимә әйткәндәрен кем белә. Улар русса һөйләгәс, мин дә шартлатып русса һөйләштем дә сығып киттем, - ти икән инәй.

## Көнө бөгөн түгел

Ауылда бер инәйҙең матур юбилейы үтә. Барыһы ла йыйылып уны ихлас ҡотлай. Арала бер ҡунаҡ: "Ah - ah, Өфөлә эшләгән улың ҡайтманымы ни һинең ҡотларға? "- тип һорай икән.

Инәй иҫе китмәй генә: "Ҡотлар, Алла бирһә, ҡотлар, көнө бөгөн түгел. Андағы число менән беҙҙәге число бер түгел бит", - тигән.

Бер инәй шәл һатырға баҙарға бара. Геүләп торған ҡала баҙарынан ҡурҡып, бабайын да ала. Күпмелер торғас:

- Үҙ йомошом менән йөрөп киләм. Һораһалар, хаҡын "пийсят" тиерһең, - ти икән.

Инәй килгәнсе бабайы шәлен алтмышҡа һатып та ҡуйған.

- Эй, нишана, "пийсят" тип тыҡып торҙом, шийсятҡа һатҡансы, - тип бабайын ҡайтҡансы әрләгән инәй.

## Башһыҙ олатай

Бәләкәй Булат үҙенең олатаһын дүрт күҙ менән көтә. Сөнки, өләсәһе әйткәнсә, ул баш ҡалаға Өфөгә киткән. Хыялында әллә ниндәй күстәнәстәр өмөт иткән малай олатаһының буш ҡул менән ҡайтыуын ауыр кисерә. Олатаһы:

- Эй, баш эшләмәгән шул уланға берәй нәмә алырға, - ти икән.

Йәне көйгән Булат:

- Ни эшләп ул башы эшләмәгән кешене Өфөгә ебәрәһегеҙ! - тигән.

## Әсегән ҡаймаҡ

Ауылдан ҡыҙы янына баш ҡалаға килгән инәй күстәнәскә ҡаймаҡ алырға онотҡан. Шуға магазинға сығып, ҡала ҡаймағын һатып алған. Ҡайтҡас, сәй эсергә ултырғандар. Ҡаймағын тәмләгәндән һуң: "Ҡуй инде был город хәлдәрен, магазиндан ҡайтҡансы ҡаймағы ла әсегән", - ти икән инәй.

**Нурия ҠУНЫСБАЕВА.**




## Кәзә койка не лежит!

Минең тормош иптәшем Сәйетҡолов Фәрғәт Баймаҡ районы Мерәҫ ауылынан. Ауылда уның Зөләйха исемле еңгәһе булғайны (хәҙер гүр эйәһе инде), шуның мәҙәктәрен яҙырға булдым. Еңгәй үҙе бик тура һүҙле, алсаҡ, һөйләгәндә урыҫса һүҙҙәр ҡушып һөйләргә ярата ине, мәрәкәсел ине. Бер ваҡыт улар ауылдаш ҡатындар менән Баймаҡҡа баҙарға дебет һата барғандар. Бер урыҫ мәрйәһе дебетен оҙаҡ итеп ҡараған да, сүпле бит, тигән. Еңгәйҙең йәне көйөп киткән дә: "Кәзә койка не лежит, фсе время сена таптайыт", - тип теге мәрйәгә асыуланған, мәрйә тиҙ генә китеп тә барған. Еңгәй был мәҙәкте үҙе бик ихлас хәтерләп һөйләй торғайны.

## Зәчим ҡаҡ түшкә төртәйеш?

Зөләйха еңгәй Хәмиҙә апай менән Магнит ҡалаһына баҙарға дебет һатырға барған. Автобустан төшкән ваҡытта бер урыҫ ире бик ҡабаланып Хәмиҙә апайға ныҡ итеп бәрелеп киткән. Хәмиҙә апай күкрәген тотоп ыңғырашып торғанда Зөләйха еңгәй, эштең нимәлә икәнен белгәс, йүгереп барып, теге ирҙе яурынынан әйләндергән дә: "Зәчим ҡаҡ түшкә төртәйеш, Николай время ышто ли", - тип теге ирҙе тиргәп киткән. Фәрғәт ҡәйнеш йыш ҡына шул хәлде иҫкә төшөрөп, еңгәһен шаяртыр инее. Еңгәй бик ҡәнәғәт йылмайып: "Уҡыттым мин ул урыҫты", - тип ҡысҡырып көлөр ине.

## Көн ыспай, төн ыспай!

Зөләйха еңгәйҙең ире Рәфҡәт ҡайнаға шофер ине. Көҙ көнө ашлыҡ йыйған ваҡытта ул бер ауылдашы менән ырҙынға иген ташыған. Төшкө тамаҡты тиҙ генә ашай ҙа ял итергә ята икән. Бер көнө еңгәй эргәһенә килгән дә, бөйөрөнә таянып: "Көн ыспай, төн ыспай, ул ниндәй бөтмәй ыспай, ана Сәлмән бер ҙә ниыспай, көнө-төнө таскай!" - тип йәне көйөп киткән. Баҡтиһәң, теге ир төш ваҡытында йоҡлап алыр булған икән...

## Ҡайтып булмаҫ ине

Һуғыш бөткәс, Мәскәүҙән һалдаттарҙы эшелон менән ҡайтарғандар. Мерәҫ ауылынан Иҙрис исемле ағай поезд менән Магнит ҡалаһына килеп етә лә, төшөргә кәрәк икәнен белмәй, кире Мәскәүгә китә лә бара икән. Өсөнсө тапҡыр урағас, уның бәхетенә поезда Баймаҡтан бер танышы осрай. Теге танышына: "Һуғыш бөттө лә ул, бына бер нисек тә ҡайтып ҡына етеп булмай бит", - тип танышы килеп сыҡҡанға бик шатланған. Ауылына ҡайтҡас, туғандары, ауылдаштары: "Нишләп, исмаһам, бер ҙә хат яҙманың?" - тип һорайҙар икән. "Үҙегеҙ әдрис ебәрмәгәс", тип аптыраҡан тегеләрҙе. Үҙенең ҡайта алмай йөрөгәнен гел һөйләп көлөп, көлдөрөп ала торған булған.

## "Ҡашыҡ" ҡайнаға

Баймаҡ районы Ярат ауылында булған мәҙәктәр. Ауылда Исмәғил олатайҙы, нишләптер, "Ҡашыҡ" тип йөрөтә торғайнылар. Атайым, әсәйем бер ваҡытта ла ҡушаматы менән әйтмәйҙәр ине, икенсе кешеләрҙән ишетә инек. Олатай колхозда объездчик булып эшләй ине. Бер саҡ яңыраҡ ауылға оҙатылып килгән килендең быҙауын игенлектән алып, бикләп ҡуйған Исмәғил олатай. Йәш килен олатайға барған да: "Ҡашыҡ ҡайнаға, быҙауымды бир инде", - тиеп уның бик йәнен көйҙөргән. Өйгә ҡайтҡас ҡына ысын исемен белгән килен. Ҡәйнәһенә: "Ҡашыҡ ҡайнаға, тигәйнем, нишләптер, ныҡ асыуланды", - тигәс, эштең нимәлә икәнен ҡәйнәһе аңлатып биргән. Исмәғил олатайға күренергә лә оялып йөрөгән килен.

## Туҡтатығыҙ!

Ярат ауылында мин бәләкәй саҡта Уйылданов Ибраһим олатай колхоз рәйесе ине. Белеме булмаһа ла бик көслө, тырыш, колхоз өсөн бөтә көсөн һалған, үҙе бик ҡыҙыу холоҡло етәксе ине. Колхозыбыҙ районда иң алдынғы ине, хатта миллионер колхоз тип тә әйтә торғайнылар. Ауылда беренселәрҙән булып "Урал" мотоциклында йөрөгән Ибраһим олатай. Бик тырышып йөрөргә өйрәнгән, ләкин ҡайһы саҡта туҡтата алмаған. Уның ҡайтыуына ҡапҡаны асып ҡуйғандар. Бер көндө ул нисек туҡтатырға онотҡан да ҡуйған. Ҡапҡаға еткәс: "Туҡтатығыҙ!" -тип ҡысҡырған, тиҙәр.

## Ултырығыҙ!

Колхозға "Победа" машинаһы бүләк иткәндәр. Бер көндө Ибраһим олатай ҡатынын, ҡыҙҙарын еләккә алып барған да, килеп алырға вәғәҙә биреп, ҡайтып киткән. Һөйләшкән ваҡытҡа килеп тә еткән, тағы ла машинаны нисек туҡтатырға онотҡан да ҡуйған. Ғаиләһе тапҡырына килеп еткәс, тормозға баҫып яйлата ла: "Ултырығыҙ!" -тип ҡысҡыра ла, китә лә бара, ти. Бер нисә тапҡыр урағас ҡына, машинаны туҡтата алған.

## Әбейҙәрҙе алыштырайыҡ

Ауылда Мурзин тигән олатай йәшәй ине. Уны, нишләптер, исеме менән әйтмәй, фамилияһы менән өндәшәләр ине. Бер көндө уға бер олатай килеп, оҙаҡ ҡына һөйләшеп ултырғандар. Әбейе ҡолаҡҡа ҡаты булған, үҙенең эше менән булышып йөрөгән. Теге ир сығып киткәс: "Нимәгә килгән ул?" -тип һораған. "Әбейҙәрҙе алыштырайыҡ", ти. Инәйҙең йәне көйөп киткән дә: "Был өйҙән бер ҡайҙа ла китәсәгем юҡ", - тип яуаплаған.

## Бөгөн отма инде

Бәзихә тигән инәй магазинға килгән. Һатыусының кешеләрҙе отҡанын ул да белгән булған. Шуға ла кәрәкле әйберен һорап алған да: "Ҡыҙым, бөгөн отма инде, аҡсам әҙ", - тип әйтеп һалған.

## Алай ҙа улым эсә

Элегерәк магазинда буш шешәләрҙе ҡабул итә торғайнылар. Бер инәйҙең улы һирәкләп кенә араҡы эсә торған булған. Беҙ бала саҡта бер ваҡытта ла иҫереп йөрөгән ирҙәр булмай торғайны, ауылда тәртип ине. Теге инәй магазинға килеп, араҡының шешәһен тапшырып, һабын ала торған булған.

Бер көндө ул: "Алай ҙа улым араҡы эсә, әтү нисек һабын һатып алыр инем?",- тип әйтеп кешеләрҙе көлдөргән.

## Симунды ла белмәйһегеҙме?

Баймаҡ районы Симун ауылынан бер егет алыҫ Көнсығышҡа әрмегә хеҙмәт итергә барған. Командир унан ҡайһы яҡтан килеүен һорағас, "Симундан", тип яуаплаған егет. "Ул ауыл ҡайҙа һуң" тип һорағас: "Симунды ла белмәйһегеҙме, Баймаҡтан 12 саҡрым" , -тип яуап биргән.

## СССР-ҙа бер юл

Беҙҙең ауылдан Вәлиәхмәт ағай әрмелә хеҙмәт итеп ҡайтҡас, бер инәй: "Улым, минең малайым да ҡайтырға тейеш ине, күрмәнеңме уны?", - тип һораған. Ағай: "Юҡ, күрмәнем", - тигән. "СССР-ҙа бер юл инде, күренмәне улың", тип тағы өҫтәп ҡуйған.

**Ғәлимә ӘХМӘТОВА.**
**Сибай ҡалаһы.**




## Берәй нәмә булдымы әллә?

Уҡыу йорттарының ятаҡтарында студенттар ғына түгел, ә уларҙы уҡытҡан уҡытыусылар ҙа йәшәй. Айнур исемле студент егет эштән һуң ғына ҡайта ла, ботинкаһын уҡытыусы йәшәгән стенаға таҡылдатҡансы бәреп сисә икән. Был хәл көн дә ҡабатланғас, уҡытыусы түҙмәй, студентын: "Һин башҡа улай итмә, юғиһә, мин уянам да, йоҡлай алмай ятам", - тип, ҡаты ғына иҫкәртеп ҡуя. Кисен Айнур ғәҙәте буйынса бер ботинкаһын шап иттереп стенаға бәреп ебәрә һәм теге һөйләшеүҙе иҫенә төшөрөп, икенсеһен ипләп кенә сисеп ултырта. Йоҡларға ятыуы була, стена аша уҡытыусыһының хәстәрлекле тауышы ишетелә: "Берәй нәмә булдымы әллә? Ҡасан ботинкаңдың икенсеһен сисәһең? Ниңә өндәшмәйһең?"

## Кәмпис, Гөлсирә!

Хәйбулла районының бер мәктәбендә була был хәл. Уҡытыусы өйҙә башҡорт теленән инша яҙып килергә ҡуша. Икенсе дәрестә барыһы ла өйгә эштәрен ихлас ҡына тапшыра, уҡытыусы дәрестән һуң яйлап ҡына иншаларҙы тикшерергә ултыра. Бер малай иншаһының аҙағына "Кәмпис, Гөлсирә!" тип яҙып ҡуйған икән. Гөлсирә апай был һүҙҙәрҙең мәғәнәһен оҙаҡ ҡына уйлағандан һуң, "кәмпис"тең "конец" икәненә төшөнгән. Хәҙер ҙә хәйбуллалар "эш тамам" тигәнде аңлатыр булһалар, "Кәмпис, Гөлсирә!" тиҙәр.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**




## Күркә булып күрһәткән

Ишҡол ауылынан Бәҙерниса тигән әбей Мәғнит баҙарына йомортҡа һатырға бара. Тауыҡ йомортҡалары бик эре булған. Мәрйәләр, "Нимә йомортҡаһы был?" тип һорашалар ҙа һорашалар, ти. Бәҙерниса әбей урыҫса белмәй, әммә аптырап тормай. Аяғүрә баҫа ла кәзәкейенең киң итәктәре осонан тотоп алып, күркә ҡанаттары кеүек йәйеп ебәрә һәм күркә тауышы сығарып, ҡорҡолдап әйләнеп йөрөй башлай. Мәрйәләр: "А-а-а, поняли, поняли, индюк, индюк", - тип көлөшөп, эре йомортҡаларҙы һатып алып бөтәләр.

Был булған хәлде Бәҙерниса әбейҙең килене уҡытыусы Нажия Ғәлина һөйләгәйне.

## Этем ялап ҡуя ине...

Шулай уҡ булған хәл. Йылайыр районында геологтарға аш бешереүсе булып эшләүсе урыҫ кешеһе һауыт-һабалар уратыуында илап ултыра икән. Эргәһенән үтеп барыусы туҡтай ҙа:

- Ниңә илайһың? - тип һорай күҙ йәштәрен һөртә лә алмай илап ултырған ашнаҡсынан.
- Этем үлде.
- Ә мин геологтарға бер-бер фажиғәле хәл булдымы, - тип уйлағайным.
- Был минең өсөн ҙур фажиғә шул, - ти теге ашнаҡсы һаман илауынан туҡтай алмай. - Хәҙер һауыт-һабаны кем "йыуа" инде?

Был хәл Йылайыр урмандарында урмансы булып эшләгән Илһамов Юнирҙың һөйләүенән яҙып алынды.

**Нәғимә ИЛҺАМОВА.**

## Ул ҡайтмаҫ...

Рима апай иренә: "Кисә ҡаҙҙар ҡаңғылдашып, МТМ яғынан ҡайтып килделәр. Берәүһе юҡ, һиңә әйтәм!
- Күрмәнем, ишетмәнем, белмәйем.
- Улай икә-ә-ән... Туҡта, атаһы, һин белмәйем тимә әле. Тыныс ҡына хәтерлә. Тулҡынланма... Бына МТМ ҡапҡаһы... Ҡаҙҙар килеп инделәр... Ә һеҙ, ас ниместәр, эсеп ултыраһығыҙ... Һиңә әйтәм! Бер ҡаҙ юҡ! Аҡ ҡаҙ - инәләре!
- Аҡ? А-а-а-а-ҡ?..
- Аҡ!
- Ул ҡайтмаҫ... Али Карнай.

## Бисәләре - беҙгә

Колхоз осоро. Ауыл мәктәбен этем-төртөм тигәндәй тамамлаған ике егет, игеҙәктәр, колхозда эшләп йөрөйҙәр. Бер көн икеһе һөйләшә:

- Ҡасан һуғыш башлана инде, әй. Һуғыш башланһа, Амангилденең ирҙәре һуғышҡа китеп бөтһә, бисәләре беҙгә ҡалыр ине...
- Һин бригадир булып алыр ине-е-е-ң, мин зав. ферма-а-а...
- Кисә Никулин һөйләне, үҙ күҙҙәрем менән ишеттем, һуғыш...
- Никулин түгел, Горбачев. Ул Асҡарға килгән, илебеҙгә ҡурҡыныс янай, п-п-п-ерестрой-ой-ойка башлана, һеҙҙең халыҡ утҡа беренсе булып инәсәк, тигән. Эйе, әйткән.
- Китә былай булғас ирҙәр...
- Донъялар үҙебеҙгә ҡала, бисәләр ҙә...
- О-о-о-о!

## Ир көткәнсе - сусҡа көт!

- Әйҙә, әйҙә еңгәй, үт, ултыр. Ни хәлдәрҙә генә йәшәйһегеҙ?
- Йәшәйбеҙ инде. Ошо арала машина яллап, өлкән ҡыҙҙы айырып алып ҡайтабыҙ. Кейәү эшләмәй, нисә йыл эшһеҙ ята. Балаларҙы уҡытырға кәрәк, газдары түләнмәй тора. Кейәүгә әйтһәң, ҡаршы ирешә, мин әллә хоҡуҡтан мәхрүмме, ти ҙә эсә... Иҫерһә, "Менәргә ине Урал тау башына", тип йырлай башлай. Кисә әле үҙҙәренә барып әйләндем. Кейәү тағы ла "Хабаровскийға командировкаға" киткән, унан ҡасан әйләнеп ҡайта әле (Оҙаҡҡа һуҙып, айыҡмай эсеп йөрөгән кешене "Хабаровскийға киткән"әйтәләр).

Ҡыҙға әйттем, ҡайтаһың! Ир көткәнсе, ана, сусҡа көт! Исмаһам, файҙаһы... Яҡшы итеп тәрбиәләп, ашатып, аҙығына "Здравур Боренька" витаминын ҡушып ебәрһәң (унда "поросята растут как на дрожжях" тип яҙылған), городтағы (Магнит ҡалаһын әбйәлилдәр шулай тип әйтә) урыҫтарға итен алып барып һатһаң, бына ҡайҙа ул аҡса! Бына шулай, ир көткәнсе - сусҡа көтһөн! Файҙаһы күберәк булыр.

**Вәкилә САФИУЛЛИНА.**

*ИНТЕРНЕТТАН*



# ҠЫРАҒАЙ АЛМА... файҙалыраҡ

■ Британияның Норич ҡалаһы аҙыҡ-түлек тикшеренеүҙәре институты ғалимдары белдереүенсә, көн һайын алма ашау ғүмерҙе оҙайтып ҡына ҡалмай, организмды ла йәшәртә. Ғалимдар әйтеүенсә, алмала йөрәкте йәшәртеүсе, ҡан әйләнешен яҡшыртыусы, иммун системаһы кимәлен күтәреүсе ҡатмарлы элемент бар. Эпикатехин полифенол тигән атама йөрөтөүсе был элемент йөрәк-ҡан тамырҙары системаһына ыңғай йоғонто яһай, ҡан тамырҙарының һығылмалылығын тәьмин итә. Тикшереү барышында асыҡланыуынса, даими алма ашау һөҙөмтәһендә йөрәк ауырыуҙары, инфаркт һәм инсультҡа килтереүсе сәбәптәр ҙә 21 процентҡа түбәнәйә. Алманың составындағы был файҙалы элемент алманың ҡырағай сорттарында юғарыраҡ була.

■ Францияның Медицина университеты ғалимдары бик аҙ йәки күп йоҡлаған кешеләрҙә икенсе типтағы диабет сире йышыраҡ осрауын асыҡлаған. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, бындай кешеләрҙең 20 процентында диабет барлыҡҡа килгән. Тәүлегенә ете-һигеҙ сәғәт йоҡлау организмды йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренән, иртә үлемдән һаҡлай.

■ Белгестәр әйтеүенсә, кеше тәүлегенә 2 литрҙан да аҙыраҡ һыу эсергә тейеш түгел. Шулай ҙа һәр кешенең организмында һыу балансы төрлө була, шуға ла организмығыҙҙы тыңлап өйрәнергә кәрәк, әгәр ҙә һыу эскегеҙ килмәһә, эсмәгеҙ. Табиптар күпме һыу эсергә икәнлеген түбәндәгесә билдәләргә кәңәш итә: һәр мең калорияға - бер литр һыу. Тимәк, ни тиклем калориялы аҙыҡ ашайһығыҙ, һыуҙы ла шул тиклем күберәк эсергә кәрәк. Тик ҡайһы саҡта организмда аҙыҡтан алынған һыу күләме 60 процентҡа етә, шуға ла табиптар һыуҙы самалап эсергә кәңәш итә.

■ Йәшел сәйҙе шәкәр һәм лимон менән эсергә кәрәк, тип кәңәш итә Америка ғалимдары. Аскорбин кислотаһы һәм сахароза йәшел сәйҙә булған катехиндың яҡшыраҡ үҙләштерелеүенә булышлыҡ итә. Полифенолдың бер төрө булған был матдә үҙ сиратында йөрәк-ҡан тамырҙары системаһына ыңғай тәьҫир итә.

■ АҠШ-тың Кеше геномы милли тикшеренеү институты ғалимдары кеше тәненең ҡайһы өлөшөндә бактериялар күберәк икәнлеген асыҡлаған. Тикшереүҙә үҙ ирке менән ҡатнашыусылар бер аҙна буйы бер төрлө генә һабын менән йыуынған. Һуңынан улар бер тәүлек буйы бөтөнләй йыуынмаған һәм ғалимдар уларҙың тәненең төрлө өлөшөнән яғынты алған. Асыҡланыуынса, кеше тәнендә, ашҡаҙан-эсәк трактындағы кеүек, 1 мең самаһы төрлө бактерия йәшәй. Бактериялар беләктә күберәк (44 төрлө) табылған, ғалимдар фекеренсә, ҡулдарҙы тейешле итеп йыумау беләктәрҙең дә бысраныуына килтерә һәм унда төрлө бактериялар йыйыла.

■ Великобританияның биотехнологик компанияһы томаттан яңы дарыу уйлап сығарған. Тикшеренеүҙәрҙә йөрәк-ҡан тамырҙары менән сирләүсе 150 кеше ҡатнаша һәм уларҙың барыһында ла был препаратты ҡабул иткәндән һуң холестерин күләме кәмегән. Ғалимдар быны томаттарға ҡыҙыл төҫ биреүсе каротиноид пикопен менән бәйләй. Тиҙҙән был дарыуҙар Англия дарыуханаларында һатыла башлаясаҡ.

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

**Бөгөн ауыл балаларының элекке кеүек ҡышын саңғы, сана шыуыуын, боҙҙа сәкән һуғыуын күреү һирәк күренешкә әйләнеп бара. Һәр замана балаһы кеүек, улар ҙа күпселек ваҡытын компьютер артында ултырып уҙғара, бәғзеләре алама ғәҙәттәр менән мауыға. Баланың рухи һәм физик үҫешенә тотҡарлыҡ яһаусы был афәттәрҙән аяп ҡалыуҙы хәстәрләп, Бөрйән районы Иҫке Монасип мәктәбенең элекке директоры Йәмил Ишбулды улы үҙ уҡыусыларын спортҡа ылыҡтырыу сараһын күрә. Эйе, күпселек ауыл балалары өсөн әлегә хыял булып ҡалған хоккей төрө бында әүҙем үҫеш алған. Тап шуға ла бөгөн урам буйлап сәкән һәм коньки тотҡан малай һәм ҡыҙҙарҙың мәктәп боҙона табан юлланыуын күреү монасиптар өсөн ят күренеш түгел. Был турала асығыраҡ бәйән итеү өсөн был башланғысҡа нигеҙ һалыусы Йәмил ҠОТЛОБАЕВтың үҙенә мөрәжәғәт иттек.**

# СӘКӘН ҺУҒЫРҒА ӨЙРӘТЕҮ...

## сәмде, рухты күтәрер сара булды

### Боҙ майҙаны асыуҙан башланды

Мин үҙем сәләмәт йәшәү рәүешен, спортты ныҡ яратҡан кешемен. Беҙ бала саҡтан боҙҙа сәкән һуғып үҫтек. Әммә әлеге ваҡытта балалар араһында ошондай ҡышҡы уйындар уйнау онотолоп бара, хәҙер күпселек балалар компьютер артында уйнауҙы хуп күрә. Был хәл мине бошондорһа ла, эште ниҙән башларға белмәй йөрөй инем. Бер саҡ мәктәпкә эшкә китеп барышлай юлда ағалы-ҡустылы Инсаф һәм Рөстәм Хәлитовтарҙың хоккей уйнап йөрөүенә тап булдым. Былар юлдың ике яҡ ситенә ҡапҡа эшләп ҡуйғандар ҙа әйҙә ат тиҙәге һуғалар. Үҙем хоккей яратҡан кеше булараҡ, "бына бит мин эҙләгән нәмә" тип, ҡыуанып киттем һәм мәктәп ихатаһында хоккей ҡумтаһы эшләргә ҡарар иттем. Уйын майҙаны әҙер булғайны ла, конькиҙар юҡ. Теге ике малайға ата-әсәһе (Зөлфиә һәм Инсур Хәлитовтар үҙҙәре лә спортты үҙ иткән ғаилә) коньки һатып алып бирҙе, ә бүтәндәр тегенән-бынан быймаға эләктереп бәйләй торған конькиҙар табып, боҙ шыуырға тотондо. Был спорт төрөн районда киңерәк йәйелдереү һәм үҫтереү өсөн район мәғариф идаралығы начальнигы Юлай Садиҡовҡа ярҙам һорап мөрәжәғәт иттем. Шулай итеп, боҙ майҙаныбыҙҙы асыуҙы ысын тантанаға әйләндереп, унда район мәктәптәре директорҙарын саҡырҙыҡ. Ни тиһәң дә, бөгөн республикала хоккей бик популяр спорт төрөнә әүерелеп барғанда беҙҙең был башланғысыбыҙ бүтән мәктәптәр өсөн дә пропаганда булыр, тип уйланыҡ. Юғиһә, Салауат Юлаев хоккей командаһы уйындарын көтөп алабыҙ, улар өсөн "көйәбеҙ", ғорурланабыҙ, ә араһында бер генә беҙҙең милләт вәкиле юҡ. Шул спортсыларҙы беҙ мәктәптән үк тәрбиәләй башларға тейеш түгелме һуң?

### Тәүге ярыш, тәүге еңеүҙәр

Ошо боҙ майҙанын асыу тантанаһындағы тәүге уйындан һуң беҙҙең уҡыусылар араһында хоккей уйынына ҡыҙыҡһыныу бермә-бер артты: ата-әсәләр балаларына конькиҙар, сәкәндәр алып бирә башланы. Бер ай үтеүгә, малай һәм ҡыҙҙар боҙға мөкиббән киткәйне. Хоккей ул ҡапҡаға шайба индерә торған сәкән һуғыу уйыны ғына түгел. Был спорт төрө аша беҙ балаларыбыҙҙа рухи үҫеш, ярыш сәме, еңеү тәме, ихтыяр көсөн дә тәрбиәләргә тейешбеҙ. Ә быға нисек өлгәшеп була? Әлбиттә, үҙеңдән оҫтараҡтар менән көс һынашып. Ә Бөрйәндә ундайҙар юҡ. Шуға күрә лә ныҡ ҡына әҙерләнеп, Белорет районының Сермән ауылы мәктәбенең боҙ майҙанына ҡунаҡҡа барырға булдыҡ. Ни тиһәң дә, был команда менән ауыл советы рәйесе үҙе етәкселек итә, улар менән шөғөлләнеүсе махсус тренер бар һәм ул Белорет районындағы иң көслө команда һанала. Беҙгә унда Белорет ҡалаһының 13-сө спорт мәктәбенең "Олимп" хоккей командаһы менән уйнарға тура килде. Тегеләр хоккей уйынына ярашлы итеп кейенгәндәр, ҡоралланғандар. Ә беҙ кем нисек теләй, шулай кейенгән, тигәндәй, быймаға тағылған баулы конькиҙар, сәкән урынына кәкре таяҡтар менән барып төштөк. Белореттар беҙҙән мыҫҡыл итеп ятып көлдө, ни әйтәһең, ҡала балалары бит. "Егеттәр, намыҫҡа тап төшөрмәгеҙ инде", - тип, балаларҙы сәмләндереп уйын майҙанына оҙаттым. Беҙҙең команда тәүге осорҙа уҡ "Олимп" уйынсыларына бер мәрәй индереп, тегеләрҙең ауыҙҙарын япты. Уйын тамамланыуға уларҙы бөтөнләй ҡапҡаларына һеңдереп ҡуйҙылар. Кейем матур булыу менәнме ни, рух тигән нәмә кәрәк бит! Тәүге тапҡыр Бөрйәндән килеп, нисек ғәрләнмәйенсә еңелеп ҡайтып бармаҡ кәрәк. Хәҙер беҙҙә уйын сәме, еңеү ләззәте уянды. Ҡайтып, икенсе йылына тағы ла ҙурыраҡ хоккей ҡумтаһы эшләнек. Тик әлеге лә баяғы махсус кейем-һалым һаман юҡ бит инде. Сәрмән ауыл хакимәте башлығы Айытбай Зәкир улы был йәһәттән беҙгә ярҙам ҡулы һуҙырға булды. Быйыл да Белорет ҡалаһы командаһын еңә алһаҡ, үҙҙәренең костюмдарын бүләк итергә вәғәҙә бирҙе. Беҙ тағы ла еңеүгә өлгәштек. Шулай итеп, аҡсалата һалғанда 120 мең һумға торошло Салауат Юлаев командаһының элекке уйын костюм комплекттарын ярты автобус итеп тейәп ҡайтып киттек.

Гел генә ҡунаҡҡа йөрөп булмай, былтыр үҙҙәрен, Белорет һәм Сермән командаларын, үҙ майҙаныбыҙға саҡырҙыҡ. Был юлы ла беҙ белореттарҙы еңдек, ә сермәндәргә әле көс һаман етеңкерәмәй. Шулай ҙа йылдан-йыл шымара, оҫтара барғаныбыҙ һиҙелә. Әйҙә әле тағы ла юғарыраҡ кимәлдә үҙебеҙҙе һынап ҡарайыҡ, тип, ғинуар айында Шишмә районында хоккей буйынса "Алтын шайба - 2010" республика фи-

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# ФАТИХАЛЫ ҒАИЛӘ УСАҒЫ -



## Ерҙәге ожмах сағылышы ул

**Үкенескә күрә, ғаилә именлегенә бөтәһе лә өлгәшә алмай. Был Аллаһы Тәғәләнең бөйөк шәфҡәте. Был именлекте яулар өсөн нимәләр эшләргә кәрәк?**

Бәйғәмбәребеҙ (саллалаһу ғәләйһи үә сәлләм): "Ҡатынды дүрт сифат буйынса һайлайҙар: уның байлығы, йәмғиәттәге урыны, матурлығы һәм тәҡүәлеге. Тәҡүәле ҡатынды һайлағыҙ, изгелек күрерһегеҙ!" - тигән. Был хәҙистә буласаҡ кәләш ниндәй сифаттарға эйә булырға тейешлеге һүрәтләнә. Был шулай уҡ ир-егеткә лә ҡағыла, сөнки һәр бер мөьмин өсөн тәҡүәлектән һуң уның изге эштәре мөһим урын биләргә тейеш. Мөхәммәт бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): "Кешенең бөйөклөгө - уның иманында, батырлығы һәм дәрәжәһе - аҡылында, ә матурлығы әхлағында (никах менән һаҡланған) йәшеренгән", - тигән. Шулай уҡ муллыҡ, әҙәп, тәртип кеүек сифаттар менән билдәләнгән ғаилә гармонияһына ла иғтибар итергә кәрәк. Ә ҡалғаны ихтыяр көсөнән һәм үҙ-үҙеңде камиллаштырыуҙан тора. Беренсеһе - шәриғәт ҡанундарын үтәү, ә икенсеһе - иман һәм ғәмәлдең камиллығы. Аллаһы Тәғәләнең ҡанундарын хөрмәтләгән ғаилә донъялағы бәхеттең нигеҙе һәм беҙҙең Яралтыусыбыҙҙың бөйөк ниғмәте булып тора. Бөтөнләгә бер-берендә аңлауҙан һәм үҙ-үҙенде ҡорбан итеүҙән ғибәрәт булған ир менән ҡатын рухи берлектә йәшәй.

Беҙҙең заманда "Ир менән ҡатындарҙың роле алмашыныуы, йәғни ҡатын-ҡыҙҙың - ир-ат, ә ир-аттың ҡатын-ҡыҙ сифатын үҙләштереүе" ғаиләләр тарҡалыуының төп сәбәпсеһе булып тора ла инде. Аллаһы Тәғәлә ир менән ҡатынға, йәмғиәттә уларҙың ниндәй урын тотоуына ҡарап, төрлө үҙенсәлектәр һәм уларҙы бер-береһенән айырып торған физик һәм рухи сифаттар биргән. Ғаиләһен тәьмин итергә тейеш булған ир-егет рух ныҡлығы, түҙем-

нал турнирына юлландыҡ. Унда әллә күпме командалар араһында финалға сығып, дүртенсе урынды алып ҡайтыуға өлгәштек. Тиҫтә йылдар буйы хоккейҙы үҫтереп, яҡшы матди база булдырған, төрлө республика кимәлендә уҙған турнирҙарҙа призлы урындарҙан төшмәгән Шишмә, Әлшәй, Саҡмағош район командаларына ҡаршы уйнау беҙҙең егеттәргә еңел булманы. Шуға ла беҙгә был урын менән ҡәнәғәтләнергә тура килде, сөнки беҙҙә әлегә ул тиклем тәжрибә лә, тренер ҙа юҡ. Ә беҙҙең команда капитаны Инсаф Хәлитов "Иң яҡшы һөжүм итеүсе" тигән кубок менән бүләкләнде. Бөрйән районы өсөн тәүге тапҡыр ҡатнашып, быңдай һөҙөмтәләргә өлгәшеп ҡайтыу ҙур ҡаҙаныш ине. Быйыл иһә, беҙ Сермән командаһын да еңеп ҡуйҙыҡ. Тәүге уйында беҙ уларҙан 20:3-кә еңелһәк, йылдар үтеүгә беҙ был һанды тигеҙләү генә түгел, үткәреп ебәреүгә өлгәштек. Был беҙҙең өсөн, әлбиттә, оло еңеү ине.

## Боҙ аша ла ялҡын тоҡана

Башта әйтеп үткәнемсә, иң тәүге йылдары ике пар хоккей конькиҙары булһа, бөгөн ауылда улар 80 пар. Бынан тыш, ҡыҙҙар фигуралы бейеүгә махсус конькиҙар һатып алды. Ә районда улар ярты мең тирәһе. Яңы кейемдәр тектереп алдыҡ һәм командаға "Монасип" исемен бирҙек. Командаға исем уйлағанда төрлө тәҡдимдәр яңғырағайны. Әммә мин егеттәргә: "Балалар, кешелә тыуған ил рухы йәшәргә тейеш. Ҡайҙа ғына йөрөһәгеҙ ҙә, арып киткән саҡта түшегеҙҙәге яҙыуға ҡарап алығыҙ. Ундағы "Монасип" һүҙен күреү менән бөтә ауыл һеҙгә ҡарап тороуын тойорһоғоҙ. Ана шул тойғо һеҙҙе еңеүгә әйҙәр", тип ауылыбыҙҙың исемен атарға кәңәш бирҙем. Был да бит рух төшөнсәһенең бөләкәй генә билдәһе. Балаларҙа рухты спорт аша тәрбиәләргә кәрәк. Рухһыҙ кешенән яҡшы атай ҙа, әсәй ҙә сыҡмаясаҡ. Хоккей ҡумтаһын асҡан ваҡытта мин балаларға: "Йылға ла шишмәнән башлана бит. Бәлки, һеҙҙең арағыҙҙа ла Салауат Юлаев командаһының буласаҡ уйынсыһы торалыр",- тигәйнем. Бөгөнгө көндә беҙҙең шишмәбеҙ йылғаға әйләнеп бара тип әйтә алам. Ошо хоккей уйыны аша беҙ күпме баланы төрлө алама гәҙәттәрҙән, компьютерҙан арындыра алдыҡ. Хоккей менән шөғөлләнә башлағандан алып мәктәптә ҡырҡа үҙгәреш һиҙелде. Балалар араһында дуҫтарса мөнәсәбәт, берҙәмлек тойғоһо барлыҡҡа килде. Улар күпселек ваҡытын боҙҙа үткәргәс, йәштәрҙе насар гәҙәттәр менән мауыҡмай. Ябай ғына боҙ киҫәгә аша балаларҙың күңеленә ялҡын һала алыуыбыҙҙы күреү шундай ҡыуаныслы. Мөмкинлек булғанда, ҡайһы ауыл малайы хоккей уйнағыһы килмәҫ ине икән? Тимәк, беҙ, өлкәндәр, был турала хәстәрлек күрергә тейешбеҙ. Баланың һәләттәрен күрә, аса белергә һәм йүнәлеш бирергә кәрәк. Беҙҙең ауыл балаларының үҙен төрлө яҡтан асырға былай ҙа мөмкинлеге аҙ, шуға ла атай-әсәйҙәр ҙә балаларына ярҙам ҡулы һуҙырға тейеш.

Бала үҙен яҡларға ла өйрәнергә тейеш. Нимә генә тимә, бөгөн беҙ көрәш төрөнә лә иғтибарҙы бүлергә тейешбеҙ, бокс, кикбоксинг булһынмы ул, милли көрәш булһынмы, йә булмаһа көнсығыш һуғыш төрҙәре. Беҙҙең балалар ҡайҙа ғына йөрөһә лә үҙен ҡыйыу тота алһын, үҙ фекерен еткерә белһен, үҙен яҡлай алһын өсөн нуғыша белергә тейеш. Балаларҙы беҙ уҡырға сығарып ебәрәбеҙ икән, уның үҙен яҡлай алыуына ышанырға тейешбеҙ. Ир кеше үҙен генә түгел, ғаиләһен, илен яҡлай алырға бурыслы. Ошоларҙы күҙ уңында тотоп, мәктәптә кикбоксинг секцияһы астым. Беҙҙең Бөрйәндән дә чемпион сыға алыуын дәлилләй алырға тейеш инек. Тренерыбыҙ Урал арьяғы чемпионы Илнур Ҡолдобаев балалар менән әүҙем шөғөлләнде һәм тиҙ арала яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшә алды. Силәбе өлкәһенә сығып, бер юлы дүрт приз, Сибайҙан өс грамота алып ҡайттылар. Фәнүр Гәлин тигән уҡыусыбыҙ Силәбенән "За волю к победе" тигән кубок яуланы. Шулай уҡ был еңеүҙәр ҙә район өсөн тәүге тапҡыр ине. Был секцияға ҡыҙҙар ҙа йөрөй башланы, күрше ауылдан килеп шөғөлләнеүселәр ҙә булды. Уҡыусылар өсөн шул тиклем кәрәкле ине ул, тик, үкенескә күрә, мәктәптә был кикбоксинг секцияһын ябып ҡуйҙылар.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әлбиттә, ауыл балаларының, ҡаланан айырмалы, спорт төрҙәрендә үҫешер мөмкинлектәре күпкә аҙ, әммә был уларҙағы һәләтте һәм ҡыҙыҡһыныуҙы үҫтереүгә кәртә булып торорға тейеш түгел. Кем белә, бәлки, тап ошонда Салауат Юлаев командаһының буласаҡ хоккейсылары, ә бүтән мәктәптәрҙә көрәшселәр, атлеттар, хатта Олимпия уйынсылары үҫәләр? Бары тик әлеге геройыбыҙ өлгөһөндә уларҙағы ошо һәләттәрҙе асыу һәм үҫтереү юлдарын күрергә кәрәк. Шул саҡта беҙ милләтебеҙҙә йоҡомһорап ятҡан сәм һәм ихтыярҙы уятып, һәр өлкәлә лә еңеүгә өлгәшә алырбыҙ, Иншаллаһ!**

**Динара ҠОТЛОБАЕВА яҙып алды.**



лек һәм билдәле бер кәүҙә үҙенсәлектәренә эйә. Шуға күрә лә ул ғаилә башлығы булып тора.

Ҡатын-ҡыҙ ғаиләһен тәьмин итергә бурыслы түгел, сөнки был уға физик яфалар һәм михнәттәр алып киләсәк. Уның рухи донъяһы һәм физиологик үҙенсәлектәре ундай һынауҙар өсөн тәғәйенләнмәгән. Ҡатын-ҡыҙҙың изге бурысы - балаһын ҡарынында йөрөтөү, тыуҙырыу һәм үҫтереү. Шулай ҙа, әгәр шарттар булһа, ул шәриғәт ҡанундарына ҡаршы килмәгән эштәрҙе башҡара ала, мәҫәлән, Ҡөрьән нигеҙҙәрен өйрәнеү буйынса ҡатын-ҡыҙҙар курсында уҡыта ала.

Аллаһы Тәғәлә бөтә был үҙенсәлектәрҙе ир менән ҡатын бер-береһен тулыландырыу торһон өсөн булдырған, ә рөхсәт ителгән сиктәрҙе боҙоу үҙ сиратында ғаилә именлегән емереүгә алып килә.

Тағы ла шуны билдәләп үтергә кәрәк: ғаиләлә "ир - тиран, ҡатын - ҡол" кеүек мөнәсәбәттәр булырға тейеш түгел, сөнки ғаилә ағзаларының береһенең хәле хужа кеүек, ә икенсеһенеке ҡол кеүек булыуы Ислам нормаларына ҡаршы килә.

Уңышлы һәм бәхетле ғаилә булһын өсөн берҙән-бер шарт - бер-беренә булған һөйөү һәм ихтирам. Шулай ҙа ата-бабаларыбыҙҙың "Ояны инә ҡош ҡора" тигән әйтемен дә онотоорға ярамай. Ошо күҙлектән ҡарағанда, ҡатын-ҡыҙға күпкә яуаплыраҡ бурыс йөкмәтелгән. Шулай итеп, ҡатын-ҡыҙ зирәклеге, тырышлығы һәм фиҙаҡәрлеге ир-егеттәге бындай сифаттарға ҡарағанда күпкә әһәмиәтлерәк, сөнки Аллаһы Тәғәлә әсәгә ата кешегә ҡарағанда күпкә юғарыраҡ тойғолар һәм дәрәжәләр биргән.

Ошо йәһәттән Исмаил Хаки Бурсеви изге Ҡөрьәндең "ат-Тарик" сүрәһенең 7-се аятында осраған "ат-тараиб" (билдән һәм ҡабырғанан сығыусы) һүҙен тәфсирләгәндә былай тип яҙа: "Әгәр сабыйы һыуға ҡолаһа, әсә кеше, ҡурҡыныс тураһында уйлап та тормай, йөрәге тетрәнеп уны ҡотҡарырға ташлана. Ә ата кеше улай эшләмәйәсәк. Балаһын ҡотҡарыуҙан өмөтөн өҙөп, ул йылға ярына ултырасаҡ һәм булып үткән хәлгә үкенеп, әсе күҙ йәштәрен түгәсәк".

Әлбиттә, бындай торош тыумыштан бирелгән бөйөк талантын юғалтмаған әсәләргә хас. Әммә балаларын урамда ташлап ҡалдырыусы ҡаты бәғерле, йәнһеҙҙәре лә бар. Улар үҙҙәренең юғары тәғәйенләнешен онотҡан һәм харап булған.

Әсә кеше физиологик үҙенсәлектәре менән түгел, ә иң беренсе үҙенең рухи сифаттары менән айырылып тора. Әгәр ҡатын-ҡыҙ был сифаттарын юғалтһа, ул әсә булыуҙан туҡтай һәм рәхимлек өлгөһөнә түгел, ә балаһын ашаған арыҫлан-һунарсыға әйләнә. Бындай осраҡта ул нисәмә яҡлаусыһы балаһын үлтерергә мөмкин! Шуға күрә ҡатын-ҡыҙҙар үҙҙәренең әсәлек потенциалын бөтәһенән дә юғары ҡуйып һаҡларға тейеш. Ошо беҙҙе эшләгән гәмәлдәре өсөн мәңгелек донъяла яуап тотмаған башҡа барлыҡтарҙан айыра ла инде. Ә балаларыбыҙ ниндәйҙер кимәлдә был донъяла беҙҙең аҙымдарыбыҙҙың күрһәткесе булып тора. Шуға күрә әсәләр, балаларына ҡарата үҙҙәренең иң яҡшы әсәлек сифаттарын күрһәтеп, үҙҙәрен мәңгелек тамуҡ утынан ҡотҡарып ҡала. Ошонан күренеүенсә, дини һәм әхлаҡи тәрбиә кешенең барлыҡҡа килеүендә төп критерий булып тора.

**Усман Нури ТОПБАШ.**
**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Стресс депрессияға этәргәндә нимә эшләргә?

Депрессия - стресс эҙемтәләренең береһе. Ул үлем теләгенә тиң. Депрессия торошонда йәшәүгә ихтыяр бөтә, кеше тиҙ ҡартая башлай. Яҡындарығыҙ ниндәй хәлдә икәнегеҙҙе аңлар, әммә уларға был турала үҙегеҙ ҙә әйтегеҙ, быны йәшерергә ярамай. Сөнки бында һүҙ тормошоғоҙҙоң яҡшымы, насармы икәнлеге тураһында түгел, һеҙ, гөмүмән, йәшәйәсәкһегеҙме - шул хаҡта бара. Ғаилә ағзалары һеҙҙе табипҡа күренергә өгөтләй башлар - был насар тәҡдим түгел.

Оҙайлы ваҡыт көсөргәнештән арыныу менән шөғөлләнгәндән һуң, һеҙгә был бүлектә яҙылған башҡа ысулдарға ла мөрәжәғәт итергә тура килер. Бәлки, был бик ғәҙәти күренер, әммә шаҡ ҡатырлыҡ һөҙөмтә алырһығыҙ: томанды яҡтылыҡ ярҙамында таратығыҙ. Бына быны эшләүҙең бер нисә ысулы: ● аҡ һауыт һәм йоҡа фарфор файҙаланығыҙ; ● көндөҙ ҙә, төнөн дә аҡ һәм сағыу кейем кейегеҙ; ● бүлмәгеҙҙә көн яҡтылығы күберәк булһын өсөн шаршауҙарҙы һәм жалюзиҙарҙы асып ҡуйығыҙ; ● кисен күберәк ут яҡтыртығыҙ; ● күҙҙәрегеҙгә зыян итмәһә, ҡояштан һаҡлаусы күҙлек киймәгеҙ.

Мин һеҙгә мөмкин булған тиклем ыңғай фекер йөрөтөргә ҡушмайым - был үтәп булмаҫтай кәңәш. Депрессия ваҡытында ыңғай фекерләп булмай. Әммә мейе компьютерығыҙҙы ыңғай йүнәлешкә программалаштырып була. Быға көсөргәнештәр арыныу һәм ыңғайға көйләнеү ярҙамында өлгәшергә мөмкин. Үҙегеҙ көсөргәнештән арынған ваҡытта дуҫтарығыҙҙың йәки туғандарығыҙҙың берәйһененән кәрәкле инструкцияны ҡыҫҡырып уҡыуын һорағыҙ. Түбәндәге аффирмацияларҙың береһен генә һайлағыҙ, әммә уны һеҙгә бер нисә тапҡыр уҡыһындар. Түбәндәгенән башлағыҙ. Уҡығандарын эстән генә үҙегеҙ ҙә ҡабатлағыҙ.

**Мин күңел төшөнкөлөгөнә бирелдем. Мин ҡабат ергә ышанысһы баҫырға теләйем. Күҙҙәремдә асҡанда барлыҡ ауыр уйҙарым таралып, күңелһеҙлек мине ташлап китер. Күҙҙәремде асыуға мине урап алған ҡараңғылыҡ таралыр һәм тормошом яҡтыраҡ булыр. Күҙҙәр асыла. Мин уянам һәм яҡты донъяға инәм.**

Быны көнөнә бер нисә тапҡыр бер нисә көн ҡабатлағыҙ. Һуңынан икенсе көйләүгә күсегеҙ.

**Мин тынысыраҡ, көслөрәк, үҙ-үҙемә ышаныслыраҡ була барам. Көн һайын мин бөтә мөнәсәбәттәрҙә лә тормошҡа ғашиҡ оптимист һәм энтузиаст була барам. Мин үҙем менән көндән-көн яҡшыраҡ идара итәм, бәхетлерәк һәм ышаныслыраҡ була барам.**

Быны ла көнөнә бер нисә тапҡыр бер нисә көн дауамында ҡабатлағыҙ. Һуңынан, күҙҙәрегеҙ асыҡ килеш, өсөнсө көйләүҙе тыңлағыҙ һәм үҙегеҙҙе нисек тойоуығыҙҙы баһалағыҙ. Әгәр әҙер икәнлегегеҙҙе тойһағыҙ, күнекмәләр циклын һуңғы аффирмация менән тамамлағыҙ. Уны көн дауамында бер нисә тапҡыр тыңлағыҙ.

**Мин - ижади шәхес. Мин идеялар бирәм. Мин проблемаларҙы хәл итәм. Юғары аң миңә яуаптар һәм хәл итеү юлдарын әйтеп, ярҙам итә. Быға отчет бирәмме, юҡмы, әммә мин алға барам. Минең киләсәккә пландарым бик ҙур.**

Ҡотлайым, һеҙ рухҡа эйә булдығыҙ.

**Роберт СТОУН.**



## 4 АПРЕЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Женские мечты о дальних странах", 1-я серия. Сериал
22.30 "Открытый космос", 1-я и 2-я серии. Док. фильм
00.30 "На линии огня". Триллер
02.50, 03.05 "Война Коннорса"
03.00 Новости

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Роковая ошибка генерала Пуго"
12.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 26-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 53-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 124-я серия
18.55 "Прямой эфир". Ток-шоу
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Дорогой мой человек", 1-я, 2-я и 3-я серии
23.45 "Дежурный по стране". Михаил Жванецкий"
00.45 "Вести+"
01.05 "Честный детектив"
01.45 "Сердце не камень". Драма
04.30 "Городок"

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Следствие вели..."
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Прокурорская проверка"
14.40 "Давайте мириться!"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Лесник". "Зуб за зуб", "Беглецы". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.10 "Футбольная ночь"
01.45 "Суд присяжных"
02.45 "До суда"
04.05 "Ты не поверишь!"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Забытые войны"**
**10.30 "Специальный репортаж"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Гора новостей"**
**11.15 "Городок АЮЯ"**
**11.30 "Приключения мастера кун-фу"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 23.15 "Замандаштар"**
**12.30, 23.30 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Весы"**
**14.00 "Народные песни"**
**14.30 "Телепортрет"**
**15.00 Новости (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и другие**
**16.15 "Семь жемчужин Башкортостана"**
**16.30 "Автограф"**
**17.15 "Тэмле"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.15 "Специальный репортаж"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**18.55 Чемпионат России по хоккею - Чемпионат ВХЛ. Плей-офф. "Торос" (Нефтекамск) - "Рубин" (Тюмень)**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Специальный репортаж"**
**23.45 Художественный фильм**
**01.00 "Прогноз погоды"**

## 5 АПРЕЛЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Женские мечты о дальних странах", 2-я серия
22.30 "Свидетели"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Следствие по телу", 7-я серия
00.40 "Я, снова я и Ирэн"
